ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-5
ноябрь - декабрь
(ҡырпағай - аҡъюлай)
2024
№47 (1140)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Рәсәй һәм Ҡаҙағстан

4

Фекерҙе ишетә белгән - йәмғиәт,
йәмғиәт хәленә битараф булмаған зыялылар бармы?

8-9

Өләсәйҙәребеҙҙең кәсептәре...
тарих сағына күмелеп ҡалмаһын, тип

11

Яугир өсөн иң ҙур бүләк - тыныслыҡ!

12-13

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2 декабрҙән 12-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2025 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 835 һум 44 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ*

# АТАЙСАЛҒА АҒЫЛАЛАР

## Бөтөн донъя башҡорттары



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың указына ярашлы, 12-14 декабрҙә Өфөлә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының VI съезы үткәреләсәк. Форумда республиканан, Рәсәй төбәктәренән һәм сит илдәрҙән 500-ҙән ашыу делегаттың ҡатнашыуы көтөлә.**

18 апрелдән 20 июнгә тиклем республикала делегаттар һайлау һәм съезд эшендә ҡатнашыу өсөн рәсми делегациялар ойоштороу буйынса дөйөм йыйылыштар (ҡоролтайҙар) уҙҙы. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының съезына әҙерлек барышында республика райондарында һәм ҡалаларында 318 делегат һайланды. Рәсәйҙең 34 төбәгенән 171 делегат билдәләнгән. Сит ил делегациялары Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән берлектә эшләгән йәмғәт ойошмалары әүҙемселәренән тора: съезға 12 илдән 38 ватандашыбыҙҙың килеүе көтөлә.

- Сара барышында "Торатау" конгресс-холында форумдар, түңәрәк ҡорҙар, секция һәм пленар ултырыштар үткәреү ҡаралған, - тип белдерҙеләр Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының матбуғат хеҙмәтендә. - Маҡсат - милләт-ара тыныслыҡты һәм татыулыҡты нығытыу, башҡорт халҡының рухи мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү, төбәктән ситтә йәшәгән ватандаштарыбыҙға булышлыҡ итеү.

Белеүегеҙсә, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) йәмғәт ойошмаһы 1995 йылда съезд ҡарары буйынса ойошторолдо. Биш йылға бер тапҡыр саҡырылған съезд (ҡоролтай) Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының юғары органы булып тора. 1995-2019 йылдарҙа биш съезд уҙғарылды.

Бөгөн Ҡоролтай республика райондарында һәм ҡалаларында 70 бүлексәне берләштерә; Рәсәйҙең 36 субъектында башҡорт йәмғәт ойошмалары эшләй. Шулай уҡ сит илдәрҙә йәшәгән һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән хеҙмәттәшлек иткән ватандаштарыбыҙ ҙа байтаҡ. Уларҙың барыһы ла башҡорт халҡының мәҙәниәтен, телен һәм традицияларын һаҡлау, донъя киңлегендә республикабыҙҙың имиджын нығытыу буйынса әүҙем эшләй.

Ҡыҫҡаһы, шағир Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай әйтмешләй: "Атайсалға ағылалар Бөтөн донъя башҡорттары..."

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЯРАЛАНҒАН ИКӘН...



**Рәсәйҙә ил Президенты Владимир Путин указы менән Махсус хәрби операция биләмәһендә яраланыу һөҙөмтәһендә инвалидлыҡ алған яугирҙарға бер тапҡыр биреләсәк торған түләү 4 миллион һумға тиклем арттырылды.**

Рәсми документта билдәләнеүенсә, әгәр хәрби 2022 йылдың 24 февраленән указ көсөнә ингәнгә тиклем имгәнгән булһа, бер тапҡыр түләнергә тейешле аҡса, яраланғанда бер тапҡыр биреләсәк торған түләүҙе иҫәпкә алып, "Ватанды һаҡлаусылар" фондынан биреләсәк.

Шулай уҡ яугирҙарға Махсус хәрби операция биләмәһендә төрлө тән йәрәхәттәре (яраланыу, имгәнеү, контузия) алған осраҡта 3 миллион һумға тиклем аҡса түләнә. Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған документ хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Указ ҡул ҡуйған көндән - 13 ноябрҙән көсөнә инде. Бынан алдараҡ "Башинформ" Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға 40-тан ашыу ярҙам сараһы күрһәтелеүе хаҡында яҙғайны. Республиканың ошо йүнәлештәге тәжрибәһен Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә лә өйрәнәләр.

*БЕҘҘЕҢ БАЛАЛАР!*

# БАШҠОРТ "СУПЕРНИНДЗЯҺЫ"

**Өфө районы Шамонин ауылы урта белем биреү мәктәбенең 11-се класс уҡыусыһы Шамил Илембәтов СТС каналында барған "Суперниндзя" халыҡ-ара шоуында ҡатнашты.**



Егеткә ни бары 16 йәш! Әммә был уға ҡатмарлы һайлау этабын үтергә ҡамасауламаны һәм ул тотош донъянан ҡатнашҡан һөнәри спортсылар араһында һынатманы. "Суперниндзя" спорт экстремаль шоуының 4-се сығарылышында ҡатнашыу тураһында ғариза яҙған 175 кешенән 25 кеше үҙ көсөн һынаны. Беренсе этапта центрифуга, тәрән упҡын, быулы цилиндрҙар, бәүелеп торған күпер аша үтергә кәрәк ине. Шамил ике һынауҙы уңышлы үтте, тик быулы цилиндрҙар этабынан төшөп ҡалды. Әммә 16 йәшлек башҡорт егетенең ошо һынауҙарҙы үтә алыуы ла үҙе бер батырлыҡ ине! Ярыштар Минераль һыуҙар ҡалаһында үткәреләсәк. Унда төрлө ҡаршылыҡтарҙан торған ярыштар үткәрелгән һыҙаттың оҙонлоғо 112 метр тәшкил итә.

12+

✓ *Рәсәйҙә урлағандарын "беҙҙең" бурҙар сит илдәргә ташып, йәшереп өлгөрә алмай. Тап бына шуның өсөн уның менән көрәш тә бер ил сиктәрендә генә башҡарылмай, ә халыҡ-ара кимәлдә алып барылырға тейеш.*



АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА



# БАЛАНДЫҢ ҠЫЛЫҠТАРЫН... күҙҙән ысҡындырма!

**Башҡортостанда йыл башынан балалар омбудсмены Ольга Панчихинаға мәктәптә балаларҙы буллингтан яҡлау буйынса 115 мөрәжәғәт килгән. Былтыр ҙа ялыу һаны шул кимәлдә булған.**

Омбудсмен фекеренсә, ата-әсәләргә, әгәр уҡыусы бала үҙ-үҙенә йомолһа, һөйләшергә, мәктәпкә барырға теләмәһә һәм унда бармаҫ өсөн барыһын да эшләһә, тәү сиратта бала менән һөйләшергә, буллингҡа шик раҫланһа, иң тәүҙә класс етәксеһе, тәрбиәсе, түңәрәк йәки секция етәксеһе менән осрашырға кәрәк. Әгәр улар бер ниндәй ҙә саралар күрмәһә, башҡа педагогтарға, психолог, социаль педагог, тәрбиә буйынса кәңәшсе, директорға барыу мөһим.

- Әгәр уларҙың береһе лә проблеманы хәл итеүҙә ярҙамлашырға әҙер булмаһа, ата-әсәләргә Өфөлә "Саторис", "Индиго", "Журавушка", "Ғаилә" психология үҙәктәренә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Шулай уҡ Башҡортостан Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы линияһы буйынса республиканың бөтә районларында һәм ҡалаларында "Ғаилә" үҙәктәре бар, унда ла психологтар эшләй, - тип билдәләне Ольга Панчихина.

**Әйткәндәй...**

Юғары категориялы табип-психиатр, Республика психотерапия үҙәге баш табибы Наталья Тулбаева баланы мәктәптә кәмһетеүҙәрен (буллинг кисергәнен) таныу билдәләре тураһында һөйләне.

Белгес әйтеүенсә, бала йыш ҡына яңғыҙ ҡалһа, уның менән бер кем дә аралашмаһа, ҡушамат таҡһалар, һөйләшкән ваҡытта тиҫтерҙәренең ым-ишараһынан ҡурҡһа, тирә-яғына ҡаранһа, мәктәпкә һуңлап барырға, дәрес бөтһә, кластан беренсе булып сығырға йәки, киреһенсә, төрлө сәбәп табып, аҙаҡтан сыҡһа, ата-әсәләргә балаһының был ҡылыҡтарына иғтибар итергә кәрәк.

Башҡа билдәләр ҙә баланы эҙәрлекләүҙе күрһәтә ала. Мәҫәлән, быҫраҡ кейемдә ҡайта, уның кәйефе ҡырҡа үҙгәрә, үҙенең телефонын йәки башҡа шәхси әйберҙәрен бүтәндәргә файҙаланыуға бирә, ашхананан йәки магазиндан кемгәлер нимәлер һатып ала, шулай уҡ мәктәп ихатаһында балалар күпләп йыйылып, кемделер ҡулсаға алһа - быларҙың барыһы ла өлкәндәрҙе уйландырырға тейеш.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

БЫНАҒАЙЫШ!

**Ике йыл араһын тоташтырып, иҫкеһе менән хушлашып, яңыһының тәүге айына эстафетаны тапшырыусы йылдың - ун икенсе, ҡыштың беренсе айы - аҡъюлай тыуа. Көн торошо ниндәй төрлөгә генә үҙгәреп тормаһын, ҡыш ҡышлығын итер: боронғолар әйтмешләй, "ҡыштың көнө бер тотамдай" ҡалыр: 21 декабрҙә иң ҡыҫҡа көн теркәләсәк - 6 сәғәт 59 минут. Һауа температураһы нулдән аҫҡа түбәнләр, төндәрен һыуытыр, туңдырыр, бурай-бурай донъябыҙҙы аҡлыҡҡа, сафлыҡҡа төрөр.**

# ҠЫШТЫҢ КӨНӨ - БЕР ТОТАМ



Аҡъюлайҙы һәр саҡ көтөп алабыҙ, яңы йыл тыуа, тип ҡыуанабыҙ, ғүмер йомғағыбыҙҙың тағы бер йылға ары тәгәрләүен әллә һиҙмәйбеҙ, әллә һиҙһәк тә, үкенмәйбеҙ ҙә, буғай... Үкенерлек нимәбеҙ бар? Урлап, тәүбә, талап йыйған, үҙебеҙ менән алып китер мал-мөлкәтебеҙ ҙә, кем әйтмешләй, ришүәт аҡсаһын һалыр йәшерен кеҫәбеҙ ҙә юҡ, шөкөр. Әммә илдә Рәсәй тарихында һис ҡасан булмаған кимәлдә ришүәтселек, коррупция гөрләп сәскә атыуына ла шаһитбыҙ. Эйе, коррупция, дөрөҫөн әйткәндә, асыҡтан-асыҡ енәйәтселек сәскә атҡан осорҙа йәшәргә тура килде беҙгә: юҡҡа ғынамы ни ярһыу йөрәкле публицист һәм яҙыусы Александр Проханов коррупцияны зәһәр ҡый үләне - ағыулы балтырған (борщевик) менән сағыштырып, уның ҡолас етмәҫлек күләмдә тормошобоҙҙоң бөтөн өлкәләрен баҫып алыуы тураһында әрнеп яҙып сыҡты. Рәсәй уның ҡыҫымында көскә тын ала, ти яҙыусы.

Һүҙҙең был күңелһеҙ тарафҡа бороолоу сәбәбе ниҙә, тиерһегеҙ. Әлеге шул яңы тыуған ай - аҡъюлай инде, дөрөҫөрәге, уның календарь битендәге Коррупция менән халыҡ-ара көрәш көнө **(9)**. Шуныһы ла раҫ: коррупция бөгөнгө көндәрҙә ил сиктәрен ашатлап сыҡты: Рәсәйҙә урлағандарын "беҙҙең" бурҙар сит илдәргә ташып, йәшереп өлгөрә алмай. Тап бына шуның өсөн уның менән көрәш тә бер ил сиктәрендә генә башҡарылмай, ә халыҡ-ара кимәлдә алып барылырға тейеш. Ләкин санкциялар осоро башланып, Европа советынан сығарылған Рәсәй коррупция өсөн енәйәт яуаплылығы тураһындағы халыҡ-ара килешеүҙән дә сығырға ҡарар итте. Йәғни, сәйәси телдә был "конвенцияны денонсациялау" тип аталды. Дәүләт башлығының был ҡарарын күптәр хупламаны һәм уның илдәге енәйәтселек менән көрәштә яҡшыға илтмәйәсәген юраны. Бындай ҡарарға килеүҙең сәбәбе нимәлә, тигәндә, уға аңлатманан күренеүенсә, Коррупция менән көрәш буйынса дәүләттәр төркөмөндәге Рәсәй делегацияһының вәкәләттәре сикләнә тип табылыуы. Шул арҡала Рәсәй Федерацияһы үҙенә ҡарата "дискриминация" шарттарында эшләүҙе мөмкин түгел, тип белдерә.

Ҡайһы берәүҙәр хафаланыуынса, конвенциянан баш тартыу Рәсәй закондарын боҙоу һәм коррупция менән көрәштең һүнеп ҡалыуына килтермәйәсәк, тип ышандыралар Кремлдә. Һәм, ысынлап та, һуңғы ике-өс йылда илдә коррупция менән көрәштә боҙ ҡуҙғалды, тип әйтергә лә булалыр. Быйыл апрелдәге отчет сығышында Рәсәйҙең Генераль прокуроры Игорь Краснов 2023 йылда вазифа биләгән 50 меңләп кешенең коррупцияла ғәйепләнеп, административ яуаплылыҡҡа тарттырылыуы һәм шуларҙың 500-ҙән ашыуының ышанысты юғалтыу сәбәпле эштән бушатылыуы хаҡында хәбәр иткәйне. Уларҙың күсемһеҙ һәм башҡа төр милек объекттарын һәм аҡсаларын ҡаҙнаға күсереү менән бер рәттән, цифрлы валюталарын һәм башҡа виртуаль активтарын дәүләт файҙаһына ҡайтарыу тәжрибәһе ғәмәлгә индерелде. Үткән йыл эсендә, шулай итеп, судтар тарафынан 400 миллиардтан ашыу суммаға коррупцияға ҡаршы прокурор юллауҙары ҡәнәғәтләндерелде һәм был сумманың байтаҡ өлөшө бюджетҡа күсерелде.

Халыҡ-ара кимәлдә коррупция менән көрәшеүсе һәм ошо йәһәттән тикшеренеүсе институттар һәм билдәле эксперттар фекере буйынса йыл һайын донъя илдәре рейтингын билдәләп барыусы Transharency International тип аталған ойошма бар. Коррупция һаҙлығына батҡан илдәр был рейтинг буйынса иң аҙаҡҡы урындан башлап - аҫтан өҫкә табан иҫәпләнә. Быйылғы йыл башында 180 ил араһында Рәсәй исемлектең аҙаҡҡы урындарының береһенә - 141-се урынға төштө (!). Был йәһәттән ул Сомали, Венесуэла, Сирия кеүек илдәр араһында. Индекс төҙөүселәр һүҙҙәренә ҡарағанда, быйылғы исемлектәге илдәрҙең өстән ике өлөшө 50-нән алып 100-гә тиклем кәмерәк балл йыйҙы. Был, тимәк, коррупцияның донъя күләмендә етди проблемаға әүерелеүе хаҡында һөйләй.

Рәсәйҙә, шуға ҡарамаҫтан, 2021 йылдың 16 авгусында Владимир Путин указы менән раҫланған 2021-2024 йылдарға коррупцияға ҡаршы милли план ғәмәлгә индерелде. Сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡытҡа, уның ҡарауы, һөҙөмтәле эш итеүгә иҫәпләнгән был пландың һуңғы, быйылғы йылы, кем әйтеүенсә, "урожайлы" ғына булды: РФ оборона министры урынбаҫары Тимур Ивановты (23 апрель) һәм бер-бер артлы уның эйәрсендәрен ҡулға алыу дәүләт органдары абруйын таплаусы ҙур скандал булды, тип яҙҙы был турала тотош донъя киң мәғлүмәт саралары. Ошоға бәйле оборона-сәнәғәт комплексы

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә үткән XX Рәсәй-Ҡаҙағстан форумында ҡатнашыу өсөн Ҡаҙағстан хөкүмәте премьер-министры урыбаҫары Ғәлимйән Ҡойшыбаев, шулай уҡ Көнбайыш-Ҡаҙағстан, Кустанай, Павлодар, Төньяҡ-Ҡаҙағстан өлкәләре хакимдары килде. Уларҙы Өфө аэропортында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡаршы алды.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин XX Рәсәй һәм Ҡаҙағстан төбәк-ара хеҙмәттәшлеге форумында ҡатнашыусыларға видеобәйләнеш аша мөрәжәғәт итте: "Сараға ике яҡлы бәйләнештәрҙе киңәйтеүсе Рәсәйҙең 30 төбәгенән һәм Ҡаҙағстандың 13 өлкәһенән вәкилдәр йыйылды. Һеҙҙең барығыҙҙың да аныҡ һөҙөмтәләргә өлгәшеүгә, яңы проекттар эҙләүгә көйләнеүегеҙ бик мөһим. Төбәк-ара килешеүҙәргә һәм мемарандумдарға ҡул ҡуйыу тураһында пакеттар шул турала һөйләй ҙә инде",- тине Владимир Владимирович.

✓Ҡаҙағстан президенты Ҡасым-Жомарт Токаев XX Рәсәй һәм Ҡаҙағстан төбәк-ара хеҙмәттәшлеге форумында ҡатнашыусыларға видеобәйләнеш аша мөрәжәғәт итеп, Өфөнө иҡтисади яҡтан ныҡлап үҫешеүсе һәм бай мәҙәни мираҫлы уникаль ҡала тип атаны. "Өфө быйыл үҙенең 450 йыллығын билдәләне, - тине ул. - Шуға ла Рәсәй һәм Ҡаҙағстандың хеҙмәттәшлегенә арналған форумдың унда үтеүе айырым әһәмиәткә эйә. Ике тиҫтә йыл эсендә был форум беҙҙең илдәрҙең хеҙмәттәшлеген нығытыуға тос өлөш индереүсе һөҙөмтәле майҙансыҡҡа әйләнде".

✓Өфөлә үткән XX Рәсәй һәм Ҡаҙағстан төбәк-ара хеҙмәттәшлеге форумының пленар ултырышында Ҡаҙағстан хөкүмәте премьер-министры урыбаҫары Ғәлимйән Ҡойшыбаев: "Беҙҙе донъялағы иң оҙон ҡоро ер сиге - мәңгелек дуҫлыҡ һәм изге күршеләр сиге берләштерә. Ошо сиктә ике яҡтан барлығы 32 миллион кеше йәшәй. Ике ил төбәктәре дәүләт-ара мөнәсәбәттәрҙе нығытыуға тос өлөш индерә. Әлеге юбилей форумы ла был юлда мөһим аҙым булып тора",- тип билдәләне.

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров 3 декабрҙә БСТ, "Рәсәй 24", "Башҡортостан 24", "Вся Уфа ", "Сәләм", UTV телеканалдары һәм "Юлдаш" радиостанцияһы тура эфирында халыҡтың көнүҙәк һорауҙарына яуап бирә. Тура бәйләнеште Радий Хәбировтың "Бәйләнештә" һәм "Класташтар" социаль селтәрҙәрендәге сәхифәләрендә лә ҡарарға мөмкин. Трансляция киске сәғәт 7-лә башлана. Республика етәксеһенә һорауҙы "Башҡортостан Башлығының тура бәйләнеше" телеграм-боты, Дәүләт хеҙмәттәрендә кире бәйләнеш платформаһы йәки республика Башлығының рәсми сайтындағы махсус бүлек аша бирергә мөмкин.

✓ ***Республикала ришүәтселектең уртаса суммаһы (120,6 мең һум) тигән нәмә лә бар икән дә. Беҙҙә пробемаларын хәл итеү өсөн кешеләр ришүәтте күберәк торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, төҙөлөш һәм мәғариф өлкәләрендә бирә.***



өлкәһендә һәм башҡа коррупция, ришүәтселек осраҡтарын һанап сығыу мөмкин дә түгел, уның өсөн һүҙ менән ҡағыҙ ҙа етмәйәсәк һәм был беҙҙең маҡсатҡа ла инмәй.

Бер аҙ Башҡортостандағы коррупция хәлдәрен ҡарап үтәйек: Милли план буйынса көрәш нисек ҡуйылған республикала? БР эске эштәр министры Александр Прядконың "Башинформ"ға интервьюһында әйтелеүенсә, республикала ришүәтселектең уртаса суммаһы (120,6 мең һум) тигән нәмә лә бар икән дә. Беҙҙә пробемаларын хәл итеү өсөн кешеләр ришүәтте күберәк торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, төҙөлөш һәм мәғариф өлкәләрендә бирә йә бирергә мәжбүр. Был сумма республика Хөкүмәте һынлы урында оялаған Александр Клебанов (элекке транспорт министры) һәм Алан Марзаев (вице-премьер) кеүек фигуралар "йомған" аҡсалар менән сағыштырыуға яҡын да бармай, әлбиттә, ләкин вағы ла, эреһе лә үҙ язаһын алырға тейешле енәйәт. Ә инде бөтөн ошо коррупция-ришүәтселек менән көрәш өсөн туранан-тура яуаплы әҙәмдәрҙең - Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө идаралығы буйынса коррупцияға ҡаршы көрәш бүлеге начальнигы Руслан Әхмәҙишин, Октябрьский ҡала полицияһының коррупцияға ҡаршы көрәш бүлеге начальнигы Илнур Абдуллин менән уның урынбаҫары - тәфтиш начальнигы Эльмира Фәритованың үҙҙәре коррупцияла һәм миллиондарса ришүәтселектә ғәйепләнеп ҡулға алыныуҙары бер ниндәй хоҡуҡ һәм әхлаҡ нормаларына һыйғыһыҙ.

Әйе, был һәм башҡа енәйәт осраҡтары беҙҙә күберәк юғары власть һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарына тап төшөрөүсе һәм уларға ҡарата халыҡ ышанысын ҡаҡшатыусы етди факттар булды. Үкенескә ҡаршы, хоҡуҡ белгестәре һәм эксперттарҙың күпселеге Рәсәй закондарын бындай енәйәттәргә ҡарата йомшаҡлыҡ күрһәтеүҙә ғәйепләй. Бәлки, улар хаҡлылыр ҙа, сөнки күршебеҙҙәге дуҫтарҙың үҙ ватандаштары - коррупционер ҡытайҙарға ҡарата атыу, аҫыу юлы менән иң юғары яза сараһы ҡулланыуында ғилләюк түгелдер...

Шулай итеп, был айҙағы иҫтәлекле һәм күренекле даталар: БР сәнәғәт эшсәндәре, Бөтөн Рәсәй хоккей **(1)** көндәре, Билдәһеҙ һалдат, Юрист, Компьютер графикаһы, Бөтөн донъя пестицидтар менән көрәш **(3)**, Информатика, Ҡыш бабайға бүләк һорап хат яҙыу **(4)** көндәре, Мәскәү яны һуғышында совет ғәскәренең немец-фашистарға ҡаршы контрһөжүмгә күскән көн **(5 декабрь, 1941)**, Ирекмәндәр, Иҡтисади һәм социаль үҫеш өсөн халыҡ-ара ирекмәндәр көндәре **(5)**, Халыҡ-ара рәссам **(8)**, Ватан Геройҙары, Коррупция менән халыҡ-ара көрәш **(9)**, Кеше хоҡуҡтары, Бөтөн донъя футбол **(10)**, Халыҡ-ара тау **(11)**, РФ Конституцияһы, Халыҡ-ара һаулыҡ һаҡлау хеҙмәттәре менән тотош тәьмин итеү **(12)**, Башҡорт теле көнө; шағир, мәғрифәтсе, башҡорт шиғриәте классигы Аҡмулланың (Мифтахетдин Камалетдинов) тыуған көнө (1831-1895), Рәсәй Хәрби-Космос көстәренең Радиотехник ғәскәрҙәре булдырылған көн, Халыҡ-ара сәй **(15)**, Стратегик тәғәйенләнештәге Ракета ғәскәрҙәре **(17)**, Фәҡирҙәргә халыҡ-ара ярҙам **(19)**, Кешеләрҙең халыҡ-ара теләктәшлек **(20)** Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы **(24)**, Эпидемияға ҡаршы халыҡ-ара әҙер тороу көндәре **(27)**, Халыҡ-ара кино көнө **(28)**.

**Аҡъюлайҙа тыуғандар:**

**2 -** Ҡаҙан танк училищеһы курсанты, экипаж командиры, хәрби бурысын үтәгәндә һәләк булған һәм үлгәндән һуң "Ҡаһарманлыҡ өсөн" миҙалы менән наградланған **Вадим Баҡыевтың тыуыуына - 40 йыл**, Әбйәлил районы Амангилде ауылында тыуып үҫкән (1984-2008).

**22 -** Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, 1949-1984 йылдарҙа Хәйбулла районының "Һаҡмар колхозында водитель булып эшләгән, йыраусы, башҡорт традицион башҡарыусылар мәктәбенең талантлы вәкилдәренең береһе, икенсе дәрәжә Ватан һуғышы ордены кавалеры **Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевтың тыуыуына - 100 йыл** (1924-2017).

**23 -** совет һәм осетин скульпторы, Өфө ҡалаһының символына әүерелгән һәм Башҡортостан Гербы һүрәтләнешендә урын алған Салауат Юлаев һәйкәленең скульпторы, СССР Дәүләт премияһы лауреаты, ике тапҡыр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ һәм Ҡыҙыл Байраҡ ордендары кавалеры **Сосланбәк Тавасиевтың тыуыуына - 130 йыл** (1894-1974).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*УҠЫУСЫ ХАТЫ*

# ОНОТОЛДОМО УЛ ДӘҮЕР?



**Йыл тамамланып та килә. Әммә республика (бәлки, үҙәк) матбуғатында, радио, телевидениела ла илебеҙ үткән был ҙур ваҡиғаны телгә алыусыны, үкенескә, осратманым.**

Илебеҙҙә ҙур күтәрелеш менән сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереүгә башланғыс һалынған 1954 йылды иҫләһәң, беҙ, үҫмерҙәр кисергән тойғолар оноторлоҡ түгел. Сиҙәм күтәреү республиканың Урал аъяғында атҡарылды. Сөнки сиҙәмселәр (целинник) көнбайыш райондарҙан килгәйне. Улар ҙур эш атҡарҙылар. Үҙ яғына ҡайтҡандар һәм йәшәргә ҡалғандар күп ине. Ул турала районыбыҙ гәзитендә Р. Фәттәхова "Баймаҡ" совхозы төҙөлөүенә бағышланған материалында яҙып сыҡты.

Башҡа райондарҙа ла ул дәүерҙе иҫкә алғандарҙыр. Сиҙәм күтәреү нисек тормошҡа ашырылғаны Л.И. Брежневтың "Целина" китабында асыҡ һүрәтләнә. Китап миндә һаҡлана. Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙе үҙләштереүгә билдәле күләмдә план да биргәндәр. Әммә уйламай-нитмәй һөрөлгән эреле-ваҡлы майҙандар тиҙ арала тупраҡтан яҙҙы - ҡом-ташҡа әйләнде. Сөнки баҫыуҙарҙы киңәйтәбеҙ тип, ағас-ҡыуаҡтар күпләп төбө-тамырынан йолҡоп ташланды. Был бигерәк тә Һаҡмар зонаһына хас ине. Рухи күтәрелеш кисерҙе халыҡ. Сөнки сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү һуғыш үә һуғыштан һуң кисергән юҡлыҡ-ярлылыҡтан ҡотолоу юлы тип тә ҡабул ителгәндер. Нисек кенә булмаһын, халыҡ, бигерәк тә йәштәр, эшкә дәррәү тотондо, яңылыҡҡа ынтылды. Юҡҡа ғына улар: "Едем мы друзья, В дальние края, Станем новоселами И ты, и я..." тип йырламағандыр.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ТАРИХ ҠАБАТЛАНАМЫ?



**Украинаның ATACMS Америка ракеталары менән Рәсәй территорияһына һөжүменә яуап итеп, Рәсәйҙең уртаса аралыҡҡа "Орешник" баллистик ракетаһы менән Днепропетровскиҙағы Көньяҡ машиналар эшләү, ә әлеге ваҡытта ҡорал етештереү заводын утҡа тотоуы үткән аҙна аҙағының иң яңғырауыҡлы шаңдау тыуҙырған ваҡиғаһы булды.**

Украинала, әлбиттә, "Орешник"ты Зеленский менән Байдендың аҡылһыҙ ғәмәленә яуап сараһы итеп түгел, ә ике аралағы "конфликтты тағы ла киңерәк йәйелдереү" тип ҡабул иттеләр. Хәйер, уларҙан башҡаса фекер көтөүе мөмкин дә түгел: улар үҙҙәренең агрессияһын язаһыҙ ҡалыр, тип ышаналар ине, ахыры. Украина властары тауыш тиҙлегенән дә шәберәк осоусы был ҡоралға ҡаршы үҙҙәренең әмәлһеҙлеген танырға мәжбүр булды. Ләкин Зеленскийҙы бөтәһенән дә бигерәк Рәсәй һөжүме айҡанлы "донъяның көслө реакция белдермәүе" борсоно: "Әгәр Рәсәйҙең ҡылығына ҡәтғи реакция юҡ икән, тимәк, шулай кәрәк, тип уйлайҙар", - тип, бөтөн донъяға үпкә белдерҙе Украина башлығы.

Был хаҡта Рәсәй тарафынан АҠШ-ҡа алдан хәбәр ителгән булһа ла, Рәсәйҙең яңы типтағы ҡеүәтле ҡорал ҡулланыуы барыбер ҙә Пентагонды хафаланырға мәжбүр итте һәм уныһы, үҙ сиратында, Украинаны иҫкәртеп өлгөрҙө. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, "Орешник" ебәреү Украинаға ҡарата Америка сәйәсәтен тотҡарлаусы фактор булып тормаясаҡ, тип белдерә АҠШ хакимиәте. Яңы ҡорал ҡулланыу АҠШ-тың ядро доктринаһын үҙгәртеүгә лә килтермәйәсәк, тип өҫтәнеләр Аҡ йорттан. АҠШ-тың Европа союздаштары ла шундай уҡ фекерҙә ҡалыуҙарын һәм Украинаға ярҙам итеүҙе туҡтатмаясаҡтарын белдерә.

Бынан алдараҡ Пентагон башлығы Ллойд Остин Украинаға, халыҡ-ара конвенция менән тыйылған булыуға ҡарамаҫтан, пехотаға ҡаршы миналар ебәрелә башлауы хаҡында белдерҙе. Сәйәси күҙәтеүселәр ошоға тиклем әллә ни агрессия белдереп бармаған Джо Байдендың бындай ҡылығын власть башынан китер алдынан яңы президент Трамптың ниәттәрен бутарға теләү, тип баһалай.

Әйткәндәй, Дональд был араларҙа ҡайҙа юғалды һуң әле? Һуңғы осорҙағы хәл-ваҡиғаларға ҡарата бер ниндәй ҙә фекер белдермәгән һәм күҙгә-башҡа ла салынмайыраҡ торған Трамптың, әйтеүҙәренсә, үҙ мәшәҡәттәре булған һәм уға үҙ командаһы ағзалары араһында килеп сыҡҡан ҡайһы бер сыр-бор менән булышырға, өҫтәүенә, тәүге президентлыҡ осоро хаҡында сыҡҡан "Американы ҡотҡарырға!" тигән китабын "туйларға" тура килгән, имеш. Ысынында иһә шул арала, дөрөҫөрәге, 22 ноябрҙә, Аҡ йорттоң буласаҡ хужаһы НАТО-ның генераль секретары Марк Рютте менән осрашҡан. Трамптың НАТО-ға тәнҡит күҙлегенән ҡарауын белгән хәрби альянс союздаштары Рюттеның яңы президент күңеленә юл эҙләп килгәнлеген йәшермәй.

Федерация Советының мәғлүмәти сәйәсәт буйынса комиссия башлығы Алексей Пушков әйтеүенсә, Дональд Трамп Аҡ йорт хужаһы Джо Байдендың Рәсәй территорияһына америка ракеталары менән һөжүм итергә рөхсәте хаҡында белмәүе мөмкин түгел ине. Трамп тәүҙә бындай ҡарарҙың өсөнсө донъя һуғышы хәүефенә килтереүе хаҡында сығыш яһауына ҡарамаҫтан, ахыр сиктә, Вашингтондың был аҙымы килешеп эшләнгән булырға оҡшай, ти Пушков.

... Әлеге ваҡытта киң мәғлүмәт баҫмалары АҠШ-тың The Wall Street Journal (WSJ) сығанағына һылтанып, Украина Ҡораллы көстәренең ATACMS ракеталары менән Ростов өлкәһенә һөжүм итеү ихтималлығын белдерә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Санкт-Петербург башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Гөлназ Ибраһимова билдәләүенсә, һуңғы халыҡ иҫәбе мәғлүмәттәре буйынса, Санкт-Петербургта 3 меңдән ашыу башҡорт йәшәй. "Ирәндек" башҡорт фольклор ансамбле, "Наза" бейеү ансамбле бик әүҙем эш алып бара. Милләттәштәр Санкт-Петербург, Ленинград өлкәһендә булған бөтә сараларҙа ҡатнаша. Ҡаланың Милләттәр йортонда башҡорт йәкшәмбе мәктәбе эшләй, балалар ғына түгел, оло йәштәге яҡташтар ҙа бында туған телдән дәрестәр ала.

✓Күмертауҙа 2025 йылдан туристик йыйым индерелә. Ҡала советы депутаттары шундай ҡарар ҡабул итте. РБК-Өфө мәғлүмәте буйынса, ике ҡунаҡхана ҡала бюджетына 1 процент һалым түләргә тейеш (әммә көнөнә 100 һумдан кәм түгел). 18 муниципалитет туристик йыйым индереүҙән баш тартты. Туризм министры Зөһрә Гордиенко былай ҙа рәсми эшләгән ҡиммәтле ҡунаҡханаларҙа һәм шифаханаларҙа йәшәгән туристарға ауырға төшөүен билдәләне һәм бындай ҡарарҙар менән ашыҡмаҫҡа саҡырҙы.

✓Башҡортостан юлдаш телеканалының сәйәхәт тураһындағы проекты 2024 йылда XXIII "ТЭФИ-Регион" Бөтә Рәсәй телевизион конкурсында еңеү яуланы. Тула ҡалаһында 18 конкурс номинацияһында еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Башҡортостан проекты "Мәғрифәтселек программаһы" номинацияһында иң яҡшыһы тип танылды. Конкурсты ойоштороусы - "Рәсәй телевидениеһы академияһы" фонды.

✓Балаға 6 йәштән ата-әсәһенең береһенең иҫәбенә бәйле булған банк карталары сығарыла, ә 14 йәштән уларҙың айырым банк иҫәбен асып, үҙ картаһын алыу хоҡуғы бар. Балаларға операциялар буйынса смс-хәбәрҙәр алыу мөмкинлеген бирергә, ташламалар, кешбэк йәки карта бонустары хаҡында һөйләргә, шулай уҡ аҡсаны бер юлы тотонмағыҙ тигән кәңәш бирергә, шул уҡ ваҡытта үҙҙәре теләгәнсә ҡулланыуҙы тыймаҫҡа кәрәк. Шул рәүешле балалар аҡса тоторға өйрәнергә тейеш.

✓Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығы 2024-2025 йылға республика мәктәптәре өсөн уҡыу календарын баҫтырып сығарҙы. Йыл дауамында балаларҙы көҙгө, ҡышҡы һәм яҙғы каникулдар көтә. Көҙгө каникул - 26 октябрҙән 4 ноябргә тиклем. Ҡышҡы ял 29 декабрҙә башланып, 2025 йылдың 12 ғинуарында тамамлана. Яҙғыһын уҡыусыларҙың 29 марттан 6 апрелгә тиклем ял итеү мөмкинлеге бар. Йәйге каникул иһә 27 майҙан 31 августаса дауам итә.

✓ *Башҡортостан Башлығы туризм тураһында ла һөйләне. Иң тәү сиратта - авиабәйләнештәрҙе булдырыу. Һәм ул яйға һалына - Башҡортостандан Алматыға һәм Астанаға рейстар асылды.*



КӨН ТЕМАҺЫ

**Өфөлә XX Рәсәй һәм Ҡаҙағстан төбәк-ара хеҙмәттәшлеге форумы булып үтте. Юбилей форумын үткәреү урыны тап Башҡортостандың баш ҡалаһы булыуы осраҡлы түгел. Эксперттар бер нисә тапҡыр беҙҙең төбәктең мәҙәниәттәр һәм цивилизацияларҙың Евразия диалогында айырым ролен һыҙыҡ өҫтөнә алды.**




# РӘСӘЙ ҺӘМ ҠАҘАҒСТАН



Рәсәй һәм Ҡаҙағстан 1992 йылдың октябрендә дипломатик мөнәсәбәттәр урынлаштыра, ә ике ил халыҡтары бәйләнештәренең тамыры тарихҡа барып тоташа. Беренсе Рәсәй-Ҡаҙағстан төбәк-ара форумы 2003 йылда Омскиҙа үтте. Ул саҡта сара сик буйы төбәктәре форумы тип атала ине. Әйткәндәй, илдәребеҙҙең сиге донъяла иң оҙон һәм 7,6 мең саҡрым самаһы тәшкил итә. Йыл һайын хеҙмәттәшлек үҫешә һәм форум, ысын мәғәнәһендә, төбәк-ара форумға әйләнде. Хәҙер ул сиратлап Рәсәй йәки Ҡаҙағстан ҡалаларының береһендә үтә. 2022 йылда форум Ырымбурҙа булғайны. Тап шул ваҡытта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров XX юбилей форумын Өфөлә үткәрергә тәҡдим итте. 2023 йылда, сараны Кустанай ҡабул иткәндә, Владимир Путин ҡатнашыусыларҙы бер йылдан Өфөгә саҡырҙы. "Рәсәй Һәм Ҡаҙағстан партнерлығында төбәк-ара бәйләнештәр үҙәк ролдәрҙең береһен уйнай. Төбәктәрҙең бер-береһе менән хеҙмәттәшлек итергә ынтылышын артабан да дәртләндерербеҙ, үҙ-ара эш итеүҙең яңы өлкәләрен эҙләрбеҙ һәм, әлбиттә, бөтә файҙалы башланғыстарығыҙҙы хупларбыҙ", - тигәйне бер йыл элек үткән форум ваҡытында Рәсәй Президенты Владимир Путин.

Өфөләге форумда ҡатнашыусылар Рәсәй һәм Ҡаҙағстан төбәктәренең сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлеге, төбәк-ара бәйләнештәрҙе киңәйтеү һәм сәнәғәт кооперацияһы мөмкинлектәрен тикшерҙе. Эшлекле программанан тыш, өфөләр һәм ҡала ҡунаҡтары ике ил предприятиеларының уңыштарын, Рәсәй һәм Ҡаҙағстан халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә халыҡ художество кәсептәре өлгөләрен күрҙе. Ике илдең йәш лидерҙары берлектәге башланғыстар һәм тәжрибә уртаҡлашыу өсөн 300 ҡатнашыусыны берләштергән "Рәсәйҙә Һәм Ҡаҙағстанда йәштәр эшҡыуарлығы: тәжрибә уртаҡлашыу һәм партнерлыҡ перспективалары" форумында ҡатнашты. Рәсәйҙең һәм Ҡаҙағстандың иң яҡшы дизайнерҙарынан мода күрһәтеү төп мәҙәни сараларҙың береһе булды. Гастрономия фестивалендә ҡунаҡтар ике илдең милли ризыҡтарынан ауыҙ итте. Йырмоң һөйөүселәр өсөн "Халыҡтар дуҫлығы тауышы" фестивале булды.

Ҡаҙағстан менән Башҡортостандың иҡтисади партнерлығы өс тиҫтә йылдан ашыу үҫешә. 1993 йылда уҡ республикалар сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйғайны. Бөгөн Ҡаҙағстан Башҡортостандың алдынғы өс сауҙа партнеры иҫәбенә инде, һуңғы 5 йыл дауамында үҙ-ара тауар әйләнеше артты. 2023 йыл йомғаҡтары буйынса ул 4,2 процентҡа артҡан. Дөйөм алғанда, быйыл Рәсәй менән Ҡаҙағстандың тауар әйләнеше 2,5 триллион һумдан (25,5 миллиард долларҙан ашыу) артҡан һәм Башҡортостандың уның үҫешенә индергән өлөшө һиҙелерлек. 2022 йылғы форумда Владимир Путин Башҡортостандың дәүләттәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе нығытыуға индергән өлөшөн билдәләне. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, ул саҡта Башҡортостан менән Ҡаҙағстандың хужалыҡ итеүсе субъекттары хеҙмәттәшлеге буйынса даими эшләүсе эшсе төркөм булдырылғайны. Төбәктәрҙең әүҙемлеге арҡаһында илдәр араһында тауар әйләнешенең бығаса булмаған үҫеше теркәлгән.

Радий Хәбиров Ҡаҙағстан президенты Ҡасым-Жомарт Токаев менән бер нисә тапҡыр осрашты. Яҡтар көнүҙәк проекттарҙы һәм хеҙмәттәшлек перспективаларын тикшерҙе. 2024 йылдың ғинуарында ошондай осрашыуҙарҙың береһендә Токаев шулай уҡ Башҡортостандың Рәсәй-Ҡаҙағстан мөнәсәбәттәрен үҫтереүҙәге әһәмиәтен һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм республикабыҙ менән хеҙмәттәшлек итеүгә ҡыҙыҡһыныуын белдерҙе.

"Беҙ һеҙҙең иҡтисадтың һәм социаль өлкәнең көслө яҡтарын беләбеҙ. Мәҫәлән, беҙҙең нефть компаниялары Башҡортостан нефтехимиктары менән үҙ-ара эш итә. Артабанғы үҫеш перспективалары яҡшы булған үҙ-ара сауҙа үҫешә. Бер-беребеҙ менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итербеҙ, тип уйлайым. Рәсәй Ҡаҙағстан өсөн союздаш һәм стратегик партнер булып тора", - тип билдәләне Ҡаҙағстан президенты.

Ысынлап та, Башҡортостан менән Ҡаҙағстан үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү өсөн яҡшы инфраструктура булдырҙы. Ҡаҙағстанда Рәсәй сауҙа вәкиллеге составында Башҡортостан вәкиллеге эшләй. Иҡтисади хеҙмәттәшлектән тыш, гуманитар өлкәлә үҙ-ара эш итеү үҫешә, мәҙәни алмашыу бара. 2023 йылдың октябрендә Өфөлә Ҡаҙағстандың почетлы консулы офисы асылды. Асыу тантанаһына килгән Ҡаҙағстандың Рәсәйҙәге ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Даурен Абаев хеҙмәттәшлек перспективаларын юғары баһаланы. "Ҡаҙағстан Башҡортостан менән сәнәғәт кооперацияһы, гуманитар, мәҙәниәт һәм башҡа төрлө өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек итә. Беҙҙә ҙур мөмкинлектәр бар, Башҡортостан - Рәсәйҙең етди төбәге, бында ҙур ҡаҙаҡ диаспораһы, меңгә яҡын студентыбыҙ бар, улар - ҙур бәйләүсе звено. Башҡортостан менән берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырабыҙ, Урал пружиналар заводы эшләй башланы, БСК менән хеҙмәттәшлек буйынса ҙур пландар бар. Беҙ туристик потенциалды ла ҡарайбыҙ. Беҙҙең студенттар Башҡортостанда күберәк булыр, тип ышанабыҙ, сөнки бында белем биреү яҡшы икәнен беләбеҙ", - тине Даурен Абаев.

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров журналистарға сара, Ҡаҙағстан менән бәйле мөнәсәбәттәр һәм башҡалар тураһында һөйләне.***

- Беҙ Ҡаҙағстан, Беларусь, Үзбәкстан кеүек диалогҡа һәм хеҙмәттәшлеккә асыҡ дәүләттәр менән әүҙем эшләйбеҙ. Беҙҙең эшҡыуарҙар Корея Халыҡ Республикаһы йүнселдәре менән әүҙем хеҙмәттәшлек итә, Төркиә партнерҙары менән дә хеҙмәттәшлек өҙөлмәне. Шуға ошо атап үтелгән илдәр менән тауар әйләнеше Башҡортостандың тотош тауар әйләнешенән 50 процентҡа күберәк тәшкил итә, - тип һөйләне Радий Фәрит улы. - Ҡаҙағстан менән сәнәғәт кооперацияһы буйынса етди килешеүҙәр бар. Был иң тәү сиратта нефть химияһы сәнәғәте һәм файҙалы ҡаҙылма байлыҡтарҙы табыу өлкәһенә ҡағыла.

Башҡортостан Башлығы туризм тураһында ла һөйләне. Иң тәү сиратта - авиабәйләнештәрҙе булдырыу. Һәм ул яйға һалына - Башҡортостандан Алматыға һәм Астанаға рейстар асылды. Башҡорт туристары өсөн Ҡаҙағстанды асыуға килгәндә, быға "Башҡортостан үҫмер оҙайлыһы" программаһы булышлыҡ итә: Астанаға барған пенсионерҙар өсөн билет хаҡы дәүләт бюджетынан финанслана.

Республика Башлығы Радий Хәбиров Ҡаҙағстан инвесторҙары өсөн республикабыҙҙа инвестицияларҙы йәлеп итеү өсөн мөмкинлектәр булыуы тураһында әйтте. Улар - иҡтисади зоналар, дәүләт саралары, шул иҫәптән һалым режимы һәм башҡалар.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Быйыл Өфөгә, Стәрлетамаҡҡа һәм Салауатҡа Ҡыш бабай поезы килә. 24 декабрҙә яңы йыл составын Стәрлетамаҡта һәм шул уҡ көндө күрше Салауатта ҡаршылайҙар. Өфөлә поезд 25 декабрҙә туҡтай. Осрашыуға теләгән һәр кем килергә мөмкин. Перронда тамашалар һәм күңел асыу саралары ойоштороласаҡ. Тамашасыларҙы вагон-ресторан һәм вагон-кибет көтә. Былтыр Өфөлә байрам поезын ҡаршы алырға 13 меңдән ашыу кеше килгәйне.

✓Өфөлә Октябрь проспектында сирендәр япраҡ ярған. Ҡалала йәшәүселәр интернет селтәрендә фотоһүрәттәр менән уртаҡлаша. Башҡортостанда ғына түгел, бындай хәл күп төбәктәрҙә күҙәтелә. Мәғәлән, Мәскәүҙә сирендәр хатта сәскә атҡан. "Быйылғы көҙ аномаль йылы булды. Ул үҫемлектәр донъяһы өсөн ҡурҡыныс түгел", - тип белдерҙе Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Көньяҡ Урал ботаника баҡсаһы-институтының ғилми хеҙмәткәре Наталья Полякова.

✓Башҡортостандың Милли музейында "Нағышлы Башҡортостан" күргәҙмәһе асылды. Экспозицияла 2024 йылда ошо уҡ исемдәге республика фестивалендә ҡатнашҡан райондарҙың карталарын күрергә мөмкин. Был 2023 йылда республика Башлығы грантына тормошҡа ашырылған "Башҡортостандың нағышлы картаһы" республика проектының дауамы булды. Күҙ яуын алырлыҡ карталарҙың авторҙары - ҡул эше оҫталары, профессиональ рәссамдар, шулай уҡ ижади студиялар, берләшмәләр, коллективтар, оҫтаханалар, предприятиелар, уҡыу йорттары, музейҙар вәкилдәре. Ошо эшкә йәмғеһе 500-ҙән ашыу кеше йәлеп ителгән.

✓Өфөлә ялған хәмер етештереүсе асыҡланған. Быға тиклем дә хөкөм ителгән 45 йәшлек ирҙең өс гараж боксында цехы булған. Полиция хеҙмәткәрҙәре унан 2000 литрҙан ашыу спиртлы шыйыҡса, мең шешә, этикеткалар, ҡойоу өсөн ҡорамалдар, "Газель" һәм "Лада Нива" автомобилдәрен тартып алған. Ялған араҡы етештереүҙә ғәйепләнеүсе ҡулға алынған. Уға ҡарата Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 171.3-сө статьяһы буйынса енәйәт эше ҡуҙғатылған, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.

✓Башҡортостан спортсыһы Эдуард Латипов Ханты-Мансиҙа барған биатлон буйынса Бөтәрмлек кубогының икенсе этабында спринт ярышында еңеү яуланы. Биатлонсы, ике тапҡыр яҙа атып, 10 саҡрымды 24 минут 31.3 секундта үтте. Көмөш миҙалды, 6 секундҡа ғына ҡалышып, Даниил Серохвостов яуланы. Өсөнсө урында иһә Кәрим Хәлили.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ТАНЫШТЫРАБЫҘ!

# БӨРЙӘН КЕЙӘҮЕ...

## Бөрйәндә етәкселек итәсәк



**Халыҡ мәнфәғәте өсөн халыҡ менән бергә эшләү мөһим. Октябрь аҙағында Бөрйән муниципаль хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнгән Рәмил Абдуллин үҙенә шундай маҡсат ҡуйған. Быға тиклем Ишембай районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары булып эшләгән замандашыбыҙ менән ҡыҫҡа әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**➔ Рәмил Миңлеәхмәт улы, беренсенән, һеҙҙе яңы вазифағыҙ менән ихлас ҡотлайым, икенсенән, үҙегеҙ менән яҡындан таныштырып үтһәгеҙсе?**

- Ысынлап та, 25 октябрҙән алып мин Бөрйән районы хакимиәте башлығы вазифаһына тәғәйенләндем. Беренсе нәүбәттә, депутаттарға ҙур рәхмәт, сөнки улар минең ошо яуаплы эште атҡара алыуыма бер тауыштан ышаныстарын белдерҙе. Үҙем сығышым менән Ишембай районы Яр-Бишҡаҙаҡ ауылынан, әммә Бөрйән районы менән күптән яҡындан танышмын: хәләл ефетем ошо төбәктән, бөрйәндәр мине кейәү тип белә. Бынан тыш, 2000-2010 йылдарҙа бында эшләп киттем, балаларыбыҙ ҙа бында тыуып-үҫте. Шуға ла мин үҙемде кейәү генә түгел, ә хатта Бөрйән егете тип хис итәм.

**➔ Тимәк, һеҙҙе ошо район кешеһе тип әйтһәң, хис тә арттырыу булмаҫ. Оҙаҡ йылдар Бөрйәндәге эш тәжрибәһенән сығып, бөгөн төбәктең киләсәген, уның үҫеш мөмкинлектәрен нисек күҙаллайһығыҙ?**

- Бөрйән районын "Башҡортостандың йөҙөк ҡашы", тип бушҡа ғына әйтмәйҙәрҙер ул. Республика төбәктәренән айырмалы, үҙенә генә хас үҙенсәлеклеге бар районың. Тәбиғәте менән генә түгел, бында халыҡ та башҡаса. Шуға Бөрйән районының үҫеше ошо үҙенсәлектәр, нескәлектәре менән айырым урын алып тора. Тәү нәүбәттә бында туризм тармағына ҙур иғтибар бүлергә кәрәк, тип иҫәпләйем. Әлеге ваҡытта туристар йәй миҙгелендә бөтә Рәсәйҙән килә, айырыуса йылға буйлап ағып төшөү хуш килә ҡунаҡтар күңеленә. Туристарҙы бер миҙгелдә генә түгел, йыл әйләнәһенә йәлеп итерлек итеп эште йөнләндерәү кәрәк. Бында йәштәрҙең әүҙемлеген көтәбеҙ: эштән ҡурҡмайынса,ең һыҙғанып тотонайыҡ ошо эшкә, тип саҡырам уларҙы. Сөнки Хөкүмәттән төрлө яҡлап ярҙам саралары тәҡдим ителә: субсидия, грант-тар алырға була. Эшләйем тигән кешегә бөтә ысулдар, юлдар асыҡ, тик теләк кенә кәрәк.

Бөрйән районы хакимиәте ағынан да туризм өлкәһен үҫтерергә теләгән йәштәрәбеҙ яҡлау таба ала. Республика район-ҡалаларындағы кеүек, беҙҙә лә "Эшҡыуарлыҡ сәғәте" даими ойоштороло һәм унда һәр кем үҙенең идеяһы, бизнес-проекты менән таныштыра ала. Төрлө өлкәгә ҡағылышлы маҡсатлы эштәр менән мөрәжәғәт итергә мөмкин. Хакимиәт белгестәре уларҙы тыңларға, кәрәк икән, субсидия, грант ярҙамдары алыу буйынса кәңәш бирергә әҙер. Сөнки ойошҡанлы эшләргә генә был йүнәлеште үҫтерергә, уның һөҙөмтәләрен күрергә мөмкин.

**➔ Республика программалары тигәндән, бөгөн төбәктә уңышлы тормошҡа ашырылған ҡайһы проекттарҙы айырым билдәләп үтергә мөмкин?**

- Башҡортостанда бөгөн төрлө мөһим проекттар тормошҡа ашырыла. Йәшәйеште арттырыуға, көнкүреште яҡшыртыуға йүнәлтелгән төрлө программаларыбыҙ бар. Әле "Мәктәп мәғариф системаларын модернизациялау" программаһының уңышлы тормошҡа ашырылыуын билдәләргә мөмкин. Киләһе йыл заявкалары буйынса Брәтәк ауылы мәктәбе капиталь ремонт эшләнергә тейешле исемлеккә ингән. Бынан тыш, мәғариф учреждениеһын йыһазландырыу, уҡыу әсбаптары менән тулыландырыу ҙа мөһим эштәрҙең береһе булып ҡала. Был программа сиктәрендә районға Хөкүмәттән ярайһы уҡ кимәлдә ярҙам алына.

Әйтергә кәрәк, "Һаулыҡ һаҡлау өлкәһен модернизациялау" проекты буйынса ла заманса медицина ҡоралдары алына, яңы фельдшер-акушерлыҡ пункттары төҙөлә. Киләһе йылға ла саралар планы ҡабул ителгән. Халыҡ һорауы буйынса районды тағы бер нисә ауылында модулле медицина объекттары файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Юл инфраструктураһы ла ыңғай хәл ителә, тип әйтергә кәрәк. Артабанғы пландарыбыҙҙа социаль объекттарға капиталь ремонт яһау, юлдар төҙәлешенә иғтибар бүлеү ҡарала. Һәм дә республика, федераль программаларҙа артабан да әүҙем ҡатнашырға уйлайбыҙ. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тармағында эштәр көйлө. Быйыл "Беларус" һәм экскаватор кеүек яңы транспорт сараларын алыуға өлгәштек. Киләһе йылға ике берәмек техникаға заявка бирҙек.

**➔ Бөрйән районы хакимиәтендә хеҙмәттәштәрегеҙ, урындағы халыҡ һеҙҙе етди етәксе тип белә. Ә ғаиләлә һеҙ ниндәй ир-уҙаман, ниндәй ҡыҙыҡһыныуҙарығыҙ бар?**

- Ғаиләгә килгәндә, хәләл ефетем менән өс балаға ғүмер биреп, уларҙы аяҡҡа баҫтырып бөттөк, тиһәң дә була. Кемеһе уҡый, кемеһе эшләп йөрөй. Ҡатыным әле Бөрйән үҙәк район дауаханаһында теш табибы булып эшләй. Беҙ ғаилә менән ял итергә яратабыҙ, балаларҙы бәләкәй саҡтарынан гел үҙебеҙ менән тәбиғәт ҡосағына йөрөттөк, уларға тыуған яҡтың хозурлығын, ошо ергә ҡарата һөйөү һалырға тырыштыҡ. Әле лә бергәләшеп республикабыҙҙың төрлө төбәктәренә сәйәхәт ҡылып торабыҙ. Байрамдарҙы ла ғаилә менән бергә үткәрергә тырышабыҙ. Әлбиттә, балалар үҫкән һайын уҙаллыраҡ була, ҡыҙыҡһыныуҙары үҙгәрә, мөһим эштәре арта бара. Шулай ҙа бергә сәйәхәт итеүҙән баш тартмайҙар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт мифологияһы үҙәгендә торған Бөрйән районы, ысынлап та, республиканың башҡа төбәктәренән көнитмеше менән айырыла. Аҫаба башҡорттарҙың бөрйән, ҡарағай-ҡыпсаҡ, түңгәүер кеүек өс ырыу вәкилдәрен берләштергән төбәк тарихында һайланған яңы етәкселекте урындағы халыҡ яңы, танһыҡ кеше булараҡ ҡабул итә. Заманында Рәмил Абдуллин Бөрйән районы урман хужалығында хоҡуҡ белгесе, унан судья ярҙамсыһы, судья, суд рәйесе вазифаларын башҡарған. Эш тәжрибәһенең булыуы - бер, ә бына анык маҡсаттар билдәләнеүе - икенсе мәсьәлә. Уңыштар теләйек!**

**Азат ҒӘЛИУЛЛИН**
**әңгәмәләште.**

ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫ ЙЫЛ БӘЙГЕЛӘРЕ

**Өфөлә яңы йыл алдынан иң матур биҙәлгән биналар һәм биләмәләр конкурсы старт алды.** Конкурсты ойоштороусы булып Өфө хакимиәте сығыш яһай, тип хәбәр иттеләр мэрияның матбуғат хеҙмәтенән. Унда сауҙа, йәмәғәт туҡланыуы, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт, спорт, йәштәр сәйәсәте һәм сәнәғәт өлкәләрендә эшләгән ойошмалар һәм учреждениелар ҡатнашырға мөмкин. Конкурс дүрт номинацияла үткәрелә: "Иң матур биҙәлгән сәнәғәт объекты", "Ҙур коммерция объекттарын биҙәү" (майҙаны 1 000 квадрат метрҙан ашыу), "Бәләкәй коммерция объекттарын биҙәү" (1000 квадрат метрға тиклем), "Дәүләт һәм муниципаль учреждениеларҙы биҙәү". Район этаптары 15 декабргә тиклем тамамлана, комиссия 29 декабргәсә йомғаҡ яһап, еңеүселәрҙе билдәләй. Бүләкләү тантанаһы 2025 йылда була.

✓**Өфөлә етем студенттарға стипендия булдырылды. Өфө мэры Ратмир Мәүлиевтың тейешле ҡарары баш ҡала хакимиәтенең рәсми сайтында баҫылған.** "Өфөнөң һөнәри һәм юғары белем биреү ойошмаларында уҡыған етем, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларға 2024-2025 уҡыу йылына Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы стипендияларын тәғәйенләргә", - тиелә документта. Түләү ҡаланың опека һәм попечителлек идарағылығы аша башҡарыла. Шулай уҡ идарағыҡҡа Өфө хакимиәте башлығы стипендияһын тәғәйенләү тураһында дипломдар тапшырыу тантанаһын үткәреү бурысы йөкмәтелде. Документта стипендияның күләме билдәләнмәй.

✓**Өфөлә капиталь ремонттан һуң туберкулезға ҡаршы диспансерҙың балалар бүлексәһе асылды.** Был Өфөнөң медицина учреждениеларын яңыртыу республика программаһы сиктәрендә файҙаланыуға тапшырылған беренсе объект булып тора. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Айрат Рәхмәтуллин ремонт эштәренән тыш, бүлексәне яңы медицина ҡоралдары, мебель, офис техникаһы менән йыһазландырыу хаҡында һөйләне. Әсә һәм бала бүлмәһе, уйын бүлмәһе булдырылды, һауа таҙартҡысы булған заманса еләтеү системаһы ҡуйылды. "Беҙҙең өсөн уңайлы шарттар булдырыу мөһим ине, сөнки туберкулез менән сирләгән пациенттар оҙаҡ дауаланырға мәжбүр, быныӊ хатта ике йылға һуҙылыуы мөмкин", - тип билдәләне һаулыҡ һаҡлау министры. Айрат Рәхмәтуллин һуҙҙәренсә, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса Өфөнөң медицина учреждениеларын яңыртыу программаһына 118 медицина объекты индерелде.

✓**26 декабрҙә киске сәғәт 5-тә Өфөнөң Ленин майҙанында Ҡыш бабай резиденцияһы үҙ ишектәрен асты, тип хәбәр итә ҡала мэрияһы (0+).** Ул икенсе йыл рәттән ҡаланың үҙәгендә - "Азимут" ҡунаҡханаһы алдындағы скверҙа урынлаштырылған. Байрамда ҡала шыршыһында уттар ҡабыҙылды. Ҡыш бабайҙы һәр кем килеп күрергә мөмкин, инеү ирекле. Резиденция 2025 йылдың 12 ғинуарына тиклем эшләй. "Ҡыш бабайҙың мөғжизәләр оҫтаханаһы"нда яңы йыл персонаждары балалар һәм өлкәндәр өсөн мауыҡтырғыс оҫталыҡ дәрестәре үткәрә. Шулай уҡ Ҡыш бабайға хат яҙып ҡалдырырға була.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Татлы борос

❖ Татлы борос һутына яртылаш кишер һуты ҡушып сәс һәм тырнаҡ үҫеше, үҫмерҙәрҙең бите боҙолғанда, арпа сыҡҡанда, тире төҫөн нормаға килтереү һәм йыуан эсәк эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн эсергә. Һутты ас ҡарынға көнөнә 1 тапҡыр сирек стакан эсергә. Хәл ныҡлап яҡшырғанға тиклем дауаланырға.

### Кейәү үләне

❖ Инсульт кисергәндә 8 ҡалаҡ үләнгә 0,5 литр араҡы нисбәтенән сығып төнәтмә әҙерләргә. 14 көн төнәтергә. Шуның менән тәндең ойоған өлөшөн көн һайын ыуырға. Бер үк ваҡытта төнәтмәнең 30-40 тамсыһын көнөнә 3 тапҡыр эсергә лә була.

❖ Ашҡаҙан яман шеше булғанда 1 ҡалаҡ кейәү үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда сирек стакан эсергә.

### Ҡайын

❖ Шәкәр диабетынан 2-3 ҡалаҡ ҡайын бөрөһөнә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 6 сәғәт төнәтергә. Тәүлек эсендә эсеп бөтөргә. Был рәүешле 1-2 аҙна, ҡанда шәкәр кимәле түбәнәйгәнсе дауаланырға.

### Баш шаулаһа

❖ 100 грамм һарымһаҡты ваҡлап 50 грамм бал, 30 мл 20 процентлы прополис төнәтмәһе, 1 стакан араҡы ҡушырға. Бөтәһен бергә болғарға, 10 көн ҡараңғы урында төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда ярты балғалаҡ эсергә.

### Һалҡын тейһә

❖ 10 грамм йүкә сәскәһен (3 ҡалаҡ) эмалле һауытҡа һалып, 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға һәм ҡапҡасын ябып, ҡайнар һыу боҫона 15 минутҡа ҡуйырға. Шунан һыуытып, һөҙөргә. Төнәтмәгә ҡайнар һыу өҫтәп миҡдарын 200 мл-ға еткерергә һәм 1 ҡалаҡ бал һалып изергә. Көнөнә 2-3 тапҡыр йылы көйөнсә ярты стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләне.**

✔ *Яугирҙар, һыҙланыуҙан һәм ауыртыуҙан тештәрен ҡыҫып түҙеп, ихлас йылмайырға тырышалар, ихлас һөйләшәләр. Атлай алырлыҡ бәләкәй генә мөмкинлек булғанда, был мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмайҙар.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Тәгәрлек**
**(Чибис)**



Күгәрсен ҙурлығында. Арҡаһы ялтырап торған йәшкелт ҡара. Башы, муйыны ҡара, елкәһендә бүрегә бар. Ҡорһағы - аҡ, ҡойроғо ҡара һыҙатлы аҡ. Ҡанаттары киң, осоуы ла үҙенә башҡа, бер өҫкә, бер аҫҡа төшөп оса.

Яҙын туй осоронда бигерәк тауышлана.

Рәсәйҙә киң таралған ҡош. Марттың аҙаҡтарында осоп килә, оя ҡорор урынды билдәләп ҡуя. Аҙаҡтан ошо ерҙә ата тәгәрлек уйын ҡорасаҡ. Айырым парҙар булып оя ҡоралар, ҡайһы саҡта колония булып та йәшәйҙәр. Далалы ерҙә апрель аҙағы-май башында оя ҡора, урманлы зонала был эште һуңғараҡ башҡара. Ояһы иҫке үлән  түшәлгән соҡорҙан ғибәрәт. Инә ҡош менән бер рәттән ата ҡош та йомортҡаларҙы баҫа. Ҡурҡыныс янағанда тәгәрлек үҙен төрлөсә тота: йә йомортҡаларын ҡалдырып, йырағыраҡ йәшеренә, йә иһә дошманына ташлана. Дошманы - ҡарға, һайыҫҡан, аҡсарлаҡ, эттәр. Кешенән дә ҡурҡмай, осоп уға ташланырға маташа. Йомортҡаларҙы баҫыу ваҡыты 24-28 көнгә һуҙыла. Урал арьяғында бәпкәләр май аҙағында күренә башлай, июнь башына улар сығып бөтә.

Бәпкәләр ата-инәһе менән ояла ҡала, йәки бергәләп ҡороraҡ урынға күсенәләр. 5 аҙналыҡ бәпкәләр оса ала.

Бөжәктәр, селәүсендәр, моллюскылар менән туҡлана. Башлыса зыян итеүсе ҡоротҡостарҙы ашай, беҙ бер ҡоштоң бөрләтәүендә 70 ҡаты ҡорт (проволочник) таптыҡ.

Сентябрҙә тәгәрлектәр бер ҡорға тупланып, ай аҙағында осоп та китәләр. Ҡышты Яҡын Көнсығышта, Урта диңгеҙ буйында үткәрә.

Беҙгә билдәле булыуынса, тәгәрлектәр сама менән 12 йыл йәшәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*

**Махсус хәрби операция тормошобоҙға бик ҙур үҙгәрештәр индерҙе. Ил халҡы берҙәм булып, ауырлыҡтарҙы еңеләйтеүгә һәр кем хәленән килгәнсә үҙ өсөн һала. Кемдер яу яланында алыша, икенселәр тылда хәрбиҙәр өсөн үтә лә кәрәк әйберҙәр эшләй, өсөнсөләр гуманитар ярҙам йыйып, уны алғы һыҙыҡҡа алып бара һәм башҡалар. Яңыраҡ Башҡортостандың тәүге ирекмән ҡатын-ҡыҙҙар отряды Луганск халыҡ республикаһында хәрби госпиталдә эшләп ҡайтты. "Беренсе тирмә" төбәк проекты ирекмәндәренең тәүге төркөмө составындағы хәрбиҙәрҙең ҡатындары, әсәләре, апай-һеңлеләре һәм шулай уҡ гуманитар ярҙам йыйыуҙа әүҙем ҡатнашҡан ҡатын-ҡыҙҙар араһында Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Муса ауылы хакимиәте башлығы Илмира Әнүәр ҡыҙы ҒӘЛИӘХМӘТОВА ла бар. Уның һөйләгәндәрен гәзит уҡыусыларға ла тәҡдим итәбеҙ.**

# ГОСПИТАЛДӘ ЭШЛӘП ҠАЙТТЫҠ...



–Хәрби госпиталдәргә барып эшләү теләге күптән күңелдә йәшәй ине, ләкин төрлө сәбәптәр арҡаһында тормошҡа ашмай килде. Башҡортостан Башлығының төбәктең эшҡыуарлыҡ һәм туризм вазифаһын башҡарыусы Зөһрә Гордиенконың Луганск һәм Донецк халыҡ республикалары хәрби госпиталдәренә барып эшләргә ирекмән ҡатын-ҡыҙҙарҙы ебәреү тураһындағы ниәтен хуплауы, башланғысты яҡлауы беҙгә, ирекмәндәргә, теләгебеҙҙе тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирҙе.

Ҡатын-ҡыҙ ирекмәндәре отряды составында хәрби госпиталдәргә барып, хәлемдән килгәнсә ярҙам күрһәтеүемде граждандыҡ бурысым тип һананым һәм уны бойомға ашыра алыуыма ҡыуанам. Төрлө өлкәлә эшләүсе, төрлө йәштәге ете ҡатын-ҡыҙ ике аҙна дауамында хәрби госпиталдә булдыҡ. Үҙемде ниндәйҙер геройға тиңләмәйем, "афарин" һүҙен әйткәндәрен дә көтмәйем һәм кәрәкмәй ҙә. Мөмкинлек булһа, тағы ла барасаҡмын.

Республикабыҙҙың төрлө төбәгенән һәм шул иҫәптән беҙҙең Иҫке Муса ауыл хакимиәте биләмәһенән дә әллә күпме ир-ат бөгөнгө көндә Махсус хәрби операцияла. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, яу яланында һәләк булғандар ҙа бар. Ауылдар халҡы хәрбиҙәргә ярҙам итеү йәһәтенән күп эштәр башҡара: маскировка селтәрҙәре үрә, әйберләтә һәм аҡсалата гуманитар ярҙам йыя һәм башҡалар. Ошоға бәйле, бер фекерем: республикала айырым-айырым эшмәкәрлек алып барған ирекмәндәрҙе бер урынға туплаусы кураторлыҡ үҙәге булдырғанда, уларҙың төрлө һорауҙары тиҙерәк хәл ителер ине, тип уйлайым.

Ярҙам күп булмай, минеңсә, шуға күрә хәрби госпиталдәргә барып эшләү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Беҙ хәрби госпиталдәрҙә табиптарға ярҙам иттек, яралыларҙы операцияға әҙерләүҙә ҡатнаштыҡ, палаталарҙа дежурлыҡ иттек. Госпиталдә ятыусыларҙың физик һыҙланыуҙарын еңеләйтергә ынтылыу менән бер рәттән, уларҙың яралы күңелдәрен дә һауыҡтырырға, йөрәк һыҙлауҙарын бер аҙға булһа ла баҫырға тырыштыҡ. Ҡул ярҙамы ла, тел ярҙамы ла кәрәк һәр кешегә, ә яугирҙарға бигерәк тә. Күңелебеҙҙә булған йылылыҡты һалдаттарға бүләк итеп, уларға рәхмәт һүҙҙәремде еткереп ҡайтырға тигән маҡсатыма өлгәштем.

Юлға йыйынғанда мораль йәһәттән ныҡ ауыр булыр, яралыларҙы ныҡ йәлләрмен инде, тип уйланым. Ә ысынында хәл икенсерәк булды. Егеттәргә ҡарата булған ихтирам, ғорурлыҡ тойғоларынан һуң йәлләү артҡы планға күсә. Яугирҙар, һыҙланыуҙан һәм ауыртыуҙан тештәрен ҡыҫып түҙеп, ихлас йылмайырға тырышалар, ихлас һөйләшәләр. Коляскаға ултырмаҫлыҡ, бер ярҙамһыҙ үҙҙәре лә атлай алырлыҡ бәләкәй генә мөмкинлек булғанда, был мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмайҙар. Ҡултыҡ таяҡтарына таянған килеш ишекте асып индерһендәрме, уңайы тура килгәндә тәм-том тотторһондармы, салфетканан сәскә эшләп бүләк итһендәрме - ихтирамлылар, иғтибарлылар.

Юморға ла урын бар госпиталдә. Инвалид коляскаһында ултырғандар үҙҙәрен таксист, тип атайҙар. Кемдәлер - "иномарка", кемдәлер - "үҙебеҙҙең машина". Ҡултыҡ таяғына таянып, ашханаға юлланғанда айырыуса шаяны "На старт, внимание, марш", тип ҡысҡырырға мөмкин. Табип кабинетына ингән саҡта мотлаҡ ҡултыҡ таяҡтарын "парковкаға" ҡуялар. Ауыр саҡта ла юмор тойғоһон юғалтмау - көслөләр өлөшө. Һоҡланғыс!

Госпиталдә эшләүсе табип, шәфҡәт туташтары бина ҡаттары буйлап атлап түгел, ә йүгереп йөрөй, сөнки һәр бер минут ҡәҙерле. Аралашыу рация аша алып барыла, һәр ҡаттың үҙ саҡырыуы (позывной). Йәш табиптар күп. Шәфҡәт туташтары ла йәштәр, матурҙар. Улар ҙа яугирҙар кеүек илебеҙҙең төрлө төбәгенән йыйылған, Башҡортостандан дүрт табипты күрҙем. 36 сәғәт эшләгәндән һуң әҙгә генә ял итеүгә туҡтайҙар. Медицина хеҙмәткәрҙәре ваҡыты-ваҡыты менән алғы һыҙыҡтағылар менән алмашыналар. Әлбиттә, унда физик яҡтан да, рухи йәһәттән дә күпкә ауырыраҡ,

Командирҙары өсөн һалдаттар үҙ балалары кеүек. Һалдаттар өсөн командирҙары атай һымаҡ. Бер-береһенә ҡарата булған оло хөрмәтте, һәр береһе өсөн һыҙланыуҙарын, ғазапланыуҙарын күреү ауыр ҙа, шул уҡ ваҡытта күңелгә май булып яғыла, ышаныс өҫтәй.

Ирекмәнлек йәмғиәтебеҙҙе берләштерҙе. Бөтә ил халҡы ҙур һәм ышаныслы ирекмәнлек корпусына әйләнде. Ул бөгөнгө ысынбарлыҡтың айырылғыһыҙ күренеше. Һәр бер ауылда, район һәм ҡалаларҙа халыҡ бергә тупланып, ниндәй ҙә булһа ирекмәнлек эше алып бара, үҙҙәренең төбәгенән МХО-ға киткәндәргә ҡулынан, хәленән кил-гәнсә ярҙам итергә тырыша. Уларҙың һәр береһе маҡтауға һәм оло хөрмәткә лайыҡ: маскировка селтәрҙәре үреүселәр, окоп шәме ҡойоусылар, тегеүселәр, оҫталар, тәм-том бешереүселәр, аҡса йыйыусылар - барыһы ла.

Унда, урында ла ирекмәнлек эше әүҙем ойошторолған. Емеш-еләк, таҙа һыу алып киләләр, өйҙә бешерелгән пирожки, бәлештәр менән һыйлайҙар. "Әгәр ҙә гуманитар конвойҙар булмаһа, ауырға тура килер ине. Тәүҙә ауыр булды, хәҙер аҙыҡ-түлек менән етерлек кимәлдә тәьмин ителгәнбеҙ. Әлбиттә, алғы һыҙыҡтағыларға ауырға тура килә, унда кәрәкле нәмәләрҙе алып барып еткереү ҡыйыныраҡ. Егеттәрҙе һауанан һаҡларға кәрәк. Маскировкалау селтәрҙәре бик ныҡ кәрәк. Улар тиҙ генә туҙа, шуға күрә ундай әйберҙәр бер ҡасан да артыҡ булмай. Хатта ябай балыҡ тотоу селтәрҙәре лә ярап ҡала - улар юлды ҡаплап, тиҙ генә үтеп китеү өсөн ҡулланыла. Шулай уҡ дрондарға ҡаршы техника, БПЛА кәрәк. Техникалар һуғышы бит", - тиҙәр ундағылар.

Яугирҙар республиканан барған гуманитар ярҙам өсөн ҙур рәхмәтле. Бәйләнгән бәләкәй уйынсыҡтар яугирҙар рюкзактарында талисман булып алғы һыҙыҡҡа китә. Башҡорт балын бик яратып, маҡтап ашайҙар. Томбовтан килгән һалдат, уға 60 йәштәр тирәһе, "Бынан да тәмлерәк бер нәмә лә ашағаным юҡ", тип, балды маҡтай-маҡтай ашаны. Уға башҡалар ҙа ҡушылды.

Барыбыҙ ҙа Махсус хәрби операцияның тамамланғанын, егеттәрҙең иҫәнһау тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтыуҙарын көтәбеҙ. Ә бының өсөн беҙгә барыбыҙға ла тырышырға, берләшергә һәм килешеп эшләргә кәрәк.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Перовскийҙың һуңынан Ырымбур генерал-губернаторҙарына бирелгән аныҡ билдәләнгән хоҡуҡтары булмай, ул үҙенең ҡарамағына нимәне файҙалы тип таба, шуны төҙәтә һәм булдыра, йәмғиәткә бер нисек тә ҡағылмаған әйберҙәргә лә аҡса тотона.

Йәйләүҙә башҡорттар араһында йәшәп, ул үҙен тулы властлы батша наместнигылай итеп күрһәтә; уның тормошонда һәм тотҡан штатында кәрәгенән артыҡ нәмәләр күп булды: башҡорттар өсөн байрамдар, ат сабыштары уҙғарыла, башҡорттарҙы рус хөкүмәтенә ыңғайлатыр өсөн һый-хөрмәт күрһәтелә, улар әүәлге һәм Перовскийҙан һуң кисерелгән кәмһетелеүҙәр урынына хәстәрлек тоя башлай.

Ул идара иткән саҡта ике йәмиғ заводы булдырыла. Ҡортсолоҡ заводы башҡорттарҙы умартасылыҡтың яңы, яҡшыртылған алымдары менән таныштырыу маҡсатында асыла, бының өсөн йәш үҫмерҙәр Чернигов губернаһындағы умартасылыҡ мәктәбенә билдәле ҡортсо Прокоповичҡа ебәрелә. Әммә был башланғыстан бер нәмә лә килеп сыҡмай: башҡорттар үҙҙәренә хас булған солоҡсолоҡ һәм түмәр умарталар ҡуйыу алымын ғына ҡуллана. Килем килтермәгән завод ябыла.

Икенсеһе - Ырымбур өйәҙе Иҫәнғол ауылы янында, Ташлы йылғаһының Ыҡ йылғаһына ҡойған тамағында нигеҙләнгән ат заводы. Дәүләт заводтарынан айғырҙар алына, ә бейәләрҙе бай башҡорттар хәйриә ярҙамы итеп бирә. Әммә заводта аттарҙың яҡшыртылған тоҡомон сығара алмайҙар: һуңғы ваҡытта айғырҙарҙы үҙҙәренең бейәләре булмаған башҡорттарға ҡарарға бирә башлағайнылар; хужалар, уларға бирелгән айғырҙарҙы эш өсөн файҙаланмаҫҡа тейеш булһалар ҙа, быны үтәмәнеләр, уларҙы насар ашаттылар, һәм айғырҙар тиҙҙән көсһеҙләнәләр. Хәрби идаралыҡ бөтөрөлөү менән завод ҡаҙнаға алына, уны тотоу өсөн күп аҡса талап ителә, 70-се йылдарҙа ул да ябыла.

Перовский төбәк менән тәүге тапҡыр идара иткә-нендә үҙенең ҡарамағында булған иҡтисади аҡсаларҙы башҡа бер файҙалы эштәр өсөн дә тотона. 1835 йылда Ырымбурҙа һыу үткәргес (водопровод) эшләнә башлай, ул Урал йылғаһы ярында әлегә тиклем һаҡланып ҡалған. Һыу ҡала майҙанындағы бассейнға ағыҙыла, ул хәҙер ҙә бар, әммә өйҙәргә үткәрелмәй; уны мискәләр менән бушлай алалар. Һыу һурғыс ҡоролмаһын (водокачка) йылытыу өсөн утынды хужалыҡҡа әҙерләнгәндән бушлай бирәләр. Һыу үткәргес төҙөү менән инглизме, немецмы шөғөлләнә. Ул офицер булған, ваҡытына ҡарата ҙур түләү - 5 мең һум ассигнация алған. Һыу үткәргес ҡәнәғәтләнерлек булмай, ә генерал Обручев, ул идара иткәндә утын әҙерләү дауам иткән хәлдә лә, уның өсөн ҡаҙна утынын бик аҙ бирә.

Перовский үҙенең йәшәү рәүеше, йомарт булыуы менән, унан һуң килгәндәрҙең береһе лә шундай сығымдар талап иткән нәмәләргә аҡсаны мул тотоноуға баҙнат итмәгән бер халәттә, төбәктең уға тиклемге төп начальниктарынан юғарыраҡ торҙо, үҙенең янында эшләгәндәр араһынан талантлы кешеләрҙе хеҙмәткәрлеккә йәлеп итә алды, уларға аҡсалата бүләктәр бирҙе, әммә уға кәрәкле суммаларҙы ҡайҙан алғанын бер кем дә белмәне.

Килгән ҡунаҡтарҙы ул һәр даим киң күңеле һәм йомарт һыйы менән ҡабул итте. Билдәле сәйәхәтселәрҙе, мәҫәлән, 1840 йылда бында килгән Мурчисон кеүектәрҙе, ул ихлас сәләмләп ҡаршы алды, улар бында губернатор ҡурсалауында һәм булышлығында йәшәне.

Бында йәй көндәрен тәбиғәт ҡосағында йәшәп, ҡымыҙ эсеп, үҙҙәре өсөн яңы тормошто, икенсе халыҡты, шишмәләрҙең һәм йылғасыҡтарҙың мул һыуҙарын, ҙур урмандарҙы, төрлө ҡырағай йәнлектәр байлығын һәм уларға һунар итеүҙе күреп, ошо хаҡта эске губерналарҙа бер ни белмәгән халәттә, Башҡортостан үҙенең Урал тауҙары һәм ул саҡтарҙа ярайһы уҡ хәлле мал көтөүсе күсмә халҡы менән аҡсалы, етеш тормошта йәшәгән кешеләрҙе үҙенә йәлеп итте.

1841 йылда, үҙенең тәүге идаралығының һуңғы йылында, Перовскийҙың йәйләүендә үҙҙәренең ижтимағи хәле буйынса күренекле кешеләр - граф Алексей Толстой (билдәле яҙыусы һәм Перовскийҙың бер туған һеңлеһе буйынса энеһе), камергер Скарятин һәм тағы ла 10-дан ашыу башҡа кешеләр ҡунаҡ булды. Был кешеләр, башҡорттар һағы аҫтында Белғош йылғаһы буйындағы йәйләүҙән Урал йылғаһы аша сығып, ул саҡта сайгак өйөрҙәре күп булған ҡырғыҙҙар яғына һунар итергә йөрөнө.

Ҡунаҡтарҙы аҫрау, уларҙы башҡорттар ярҙамында һаҡлап йөрөтөү һәм уларға бүләктәр биреү ҙур сығымдар талап итә, һәм Перовский уларҙы үҙ иҫәбенә ҡаплай.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

ХӘТЕРЛӘП...

# ХӘБИБУЛЛА ҒӘБИТОВ



**Силәбенең башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәгендә билдәле башҡорт йәмәғәт эшмәкәре, шағир, журналист, драматург һәм тел белгесе Хәбибулла Ғәбитовтың 140 йыллығына арналған төбәк-ара ғилми-ғәмәли ҡор үтте.**

Төп маҡсаты Көньяҡ Уралда йәшәгән башҡорттар араһында Хәбибулла Ғәбитовтың ижади эшмәкәрлеген һәм мираҫын популярлаштырыу булған был осрашыуҙың ойоштороусылары булып Башҡортостандың Урал федераль округындағы вәкиле Әлфир Байымов һәм Силәбелә Башҡортостандың Халыҡтар дуҫлығы йорто филиалы - Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге етәксеһе Рауил Әсәҙуллин сығыш яһаны. Әлфир Байымов һәм ҡорҙа ҡатнашыусылар башҡорт матбуғатын үҫтереүҙә, Ырымбурҙа һәм Өфөлә гәзит-журналдар сығарыуҙа, башҡорт теле нормаларын булдырыуҙа Хәбибулла Ғәбитовтың әһәмиәтле роле тураһында һөйләне.

Хәбибулла Ғәбделҡаһир улы Ғәбитовтың ижади һәм ғилми эшмәкәрлеге 1913 йылдан башлана. Шул ваҡыттан алып уның шиғырҙары "Ваҡыт", "Тормош", "Мөғәллим", "Шура" кеүек башҡорт гәзит-журналдарында баҫыла башлай, тип иҫкә төшөрҙө тыуған яҡты өйрәнеүсе Михаил Хәбиров. Совет йылдарында уҡ Х. Ғәбитов Башҡортостандың милли матбуғатына һәм мәғарифына нигеҙ һалыусыларҙың береһе була. 1918 йылда "Тулҡын" йәштәр ойошмаһы Х. Ғәбитовтың "Башҡорт моңдары" тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығын сығара. "Урал йырҙары" исемле икенсе шиғырҙар йыйынтығы 1923 йылда донъя күрә. Уның "Ынйыҡай менән Юлдыҡай" пьесаһы (1924) күп тапҡыр республиканың башҡорт театрҙары сәхнәләрендә күрһәтелә.

Хәбибулла Ғәбитов бөйөк башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич һәм башҡа алдынғы йәштәр менән бергә "Тулҡын" ойошмаһын төҙөй. Башта ул "Башҡортостан йәштәре берлеге" тип атала. Нәҡ ошо Нуриәғзәм Таһиров һәм Абдулхәй Иркәбаев кеүек йәштәрҙе туплаған ойошма Шәйехзада Бабичтың иҫән сағындағы берҙән-бер шиғырҙар йыйынтығын, Хәбибулла Ғәбитовтың "Башҡорт моңдары" исемле тәүге китабын сығара.

Хәбибулла Ғәбитов - "Башҡортса яҙыу ҡоралы", "Башҡорт теленең сарыфы", "Башҡорт теленең грамматикаһы" һәм башҡа ғилми хеҙмәттәрҙең авторҙашы. Шулай уҡ "Боронғолар һүҙҙәре. Башҡорт телендә мәҡәлдәр һәм тапҡыр һүҙҙәр" фольклор йыйынтығының автор-төҙөүсеһе (Ғ. Ф. Вилданов менән бергә).

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

1-се Украин фронтының 13-сө армияһы, 3-сө һәм 5-се гвардия армиялары, 52-се армия һәм Поляк Ғәскәренең 2-я армияһы Нейсе йылғаһы аша сыға һәм ярһып-ашҡынып алға барыуын дауам итә. Дошман да тик ятмай, һуңғы һалдатына тиклем ҡаршылыҡ күрһәтә, ҡайһы бер урындарҙа контратакаға күсеп тә ҡарай. Көсөргәнешле алышҡа өҫтәмә ғәскәрҙәр: 25-се һәм 4-се гвардия танк корпустары, ә икенсе көндә 3-сө һәм 4-се гвардия танк армияларының төп көстәре индерелә. 18 апрелдә 1-се Украин фронты ярҙамға килгән ғәскәрҙәр менән бергә дошмандың Нейсен оборона рубежын ҡыйрата. Танк армиялары, Шпрея йылғаһы аша сығып, Берлин йүнәлешендә хәрәкәтен дауам итә, немецтарҙың Франкфуртско-Губенск төркөмө тылдарына сыға.

Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында 1-се Белорус фронт составында барлығы 13 армия, 4 корпус: 61-се, 47-се, 33-сө, 3-сө, 69-сы армиялар, Поляк Ғәскәренең 1-се армияһы, 3-сө һәм 5-се удар армиялар, 8-се гвардия армияһы; 1-се һәм 2-се гвардия танк армиялары; 16-сы һәм 8-се һауа армиялары; 9-сы һәм 11-се танк корпустары, 7-се һәм 2-се гвардия атлы корпустары ҡатнаша. Операция планна ярашлы, 7-се гвардия атлы корпусы 61-се армия командующийының оператив етәкселеге аҫтында хәрәкәт итә. Корпус, дошман оборонаһын өҙгәс, Берлинғаса етеп, уның төньяҡ-көнсығыш ҡырыйына бәреп инергә тейеш була.

Корпус командиры гв. генерал-лейтенанты М. П. Константинов, алда торған боевой хәрәкәттәр полосаһындағы хәлдәрҙе өйрәнеп, шундай һығымтаға килә: 7-се гв. атлы корпусын 47-се йә иһә 3-сө удар армиялар хәрәкәт иткән полосала файҙаланыу маҡсатҡа ярашлыраҡ. Сөнки корпус частарын дошман оборонаһын йырып үтеү маҡсатында туплай торған плацдарм Одер йылғаһының һул яҡ ярында, 47-се һәм 3-сө удар армияларҙың һөжүм итеү полосаһында була (61-се армия уң яҡ ярҙа ҡалып, операция планы буйынса бер көнгә һуңғараҡ һөжүмгә күсергә тейеш). Корпус командиры ошо хаҡта фронт командующийы, Советтар Союзы Маршалы Г.К. Жуковҡа хәбәр итә һәм үҙенең хәрәкәт итеү планын тәҡдим итә. Г. К. Жуков был планды раҫлай һәм 7-се гв. атлы корпусына дошман оборонаһын 16 апрелдә һөжүмгә күскән 47-се һәм 3-сө удар армиялар полосаһында йырып үтеү бурысын йөкмәткән ҡарар сығара.

Корпус командиры корпус частарына, 47-се армияның уҡсы соединениелары Врицен - Куперсдорф рубежына сыҡҡас та, дошман оборонаһын йырып үтеп, алға табан һөжүм итеүҙе дауам итергә бойороҡ бирә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Заманында колхоздар ниңә юҡҡа сыҡты? Ана шул үҙенән-үҙе ойошоу булманы. Ғаилә лә тарҡалып китә, сөнки кеше үҙенең йәшәү мәғәнәһен ғаиләнең, йәмғиәттең йәшәү мәғәнәһенә ҡаршы ҡуя.*



**Өфөлә эшкә ашыҡҡан бер мәлдә маршрут автобусы тығынға эләкте. Водитель тиҙ генә ҡуҙғалмаясағыбыҙҙы әйткәс, күптәр эш урындарына шылтырата башланылар. Шунда мин артыҡ иғтибар талап итмәгән бер күренешкә иғтибар иттем. Олораҡтар, беҙ тығында торабыҙ, тиҙәр, йәштәр, мин - пробкала, тиҙәр. Ана шул "беҙ" менән "мин" тигән ҡыҫҡа һүҙҙәр аптыратты мине. Элек бит совет осоронда беҙ бер бөтөн инек, үҙебеҙҙе шул бөтөндөң өлөшө тип һанай инек, күберәге "беҙ" тип һөйләшә инек. Бөгөнгө "мин", тип һөйләшкәндәр тиҙ арала бер бөтөнгә ойоша алырмы? Әллә эгобыҙ көслөрәк булып сығырмы? Был турала фән ни уйлай? Ошондай һорау менән иҡтисадсы-ғалим, юғары мәктәп уҡытыусыһы, иҡтисад фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре БАРЛЫБАЕВ Әҙеһәм Әғзәм улына мөрәжәғәт иттек.**

# ФЕКЕРҘЕ ИШЕТӘ

### Синергетик системалар

Эйе, фекерҙе ишетә белгән йәмғиәт, йәмғиәттәге ваҡиғаларға һаңғырау булмаған зыялылар бик тә кәрәк. Бөгөн бит һәр зыялының донъяһы башҡа, һәр береһе үҙенсә уйлай. Совет заманын яманлаһаҡ та, уның илдең киләсәгенә ыңғай йоғонто яһағандай үҙ ысулдары бар ине. Берҙәм кешеләр уртаҡ маҡсаттарға, дөйөм принциптарға таянғас, дөйөм бер мәғәнә булды, һәм хөкүмәт, йәмғиәт кимәлендә бер йүнәлештә күп эшләнелә ине.

Октябрят, пионер, комсомол йәшендәгеләр бер әхлаҡи нормаларҙа тәрбиәләнде, артабан кеше ҡайҙа хеҙмәт итеүенә ҡарамай, Тыуған илгә һөйөү тойғоһо менән йәшәне, Ватан ни ҡуша, мотлаҡ үтәлергә тейеш һаналды. Комсомол йүнәлтмәләре буйынса йәштәр БАМ, КАМАЗ кеүек ҙур төҙөлөштәрҙә эшләне, 80-се йылдағы олимпиадаға Мәскәүгә йүнәлде. Илгә кәрәк булғанда халыҡ ойоша торғайны, берҙәмлек шул булдырыла ине.

Был ябай эш түгел, сөнки йәмғиәт бик ҡатмарлы система. Герман Хакен тигән немец ғалимы нигеҙ һалған синергетика фәне нәҡ ана шул ҡатмарлы системаларҙы өйрәнә. Дәүләт, ғөмүмән, йәмғиәткә бәйле бөтә системалар ҙа ҡатмарлы системаларға инә. Уларҙы бер нисек тә ябайлаштырып булмай. Иҡтисад, мәҙәниәт, белем биреү системаһы, армия - бөтәһе лә ҡатмарлы системалар. Ҡатмарлы биология системалары, мәҫәлән, кеше организмы ла шул синергетик системаға ҡарай. Был системалар нисек үҫешә, хәрәкәт итә, үҙгәрә, ниндәй закондарға буйһона - белеп бөтмәйбеҙ. Был фән бик ауыр бирелә, сөнки уны аңлар өсөн бик киң белем кәрәк, бөтә системалар тураһында ниндәйҙер кимәлдә мәғлүмәт булырға тейеш. Шуға, әлбиттә, бик күп уҡырға кәрәк. Аңларға тырышһаң, күп нәмәне аңларға була.

Бер нәмәне мин аныҡ төшөндөм: ана шул ҡатмарлы системаларҙа ниндәйҙер дөйөм маҡсаттар, дөйөм принциптар, дөйөм идеялар, идеалдар, дөйөм ҡиммәттәр булмаһа, ул система юҡҡа сыға. Улар үҙҙәренән-үҙҙәре ойоша торған системалар. Йәмғиәт өсөн үҙенең ҙур яуаплылығын тойоп, һәр эшен, бурысын, функцияһын үтәгән кешеләр булмаһа, йәмғиәттең, кешелектең киләсәге бик икеле. Ваҡытында шуны аңлау өсөн донъя диндәре, философия фәне барлыҡҡа килгән, йәмғиәт тураһындағы башҡа фәндәр үҫеш алған, белем барлыҡҡа килгән, һәр осорҙоң үҙ зыялылары булған. Мәҫәлән, грек цивилизацияһын алайыҡ. Үҙенсә күренекле, үҙенсәлекле, тарихи цивилизация. Хәҙерге бөтөн Европа мәҙәниәте шул грек, рим цивилизацияһынан күтәрелеп киткән. Уларҙы варварҙар юҡҡа сығармаған. Әлбиттә, тышҡы факторҙар тәьҫир яһай, әммә эске, тышҡы кире факторҙарға ҡаршы торорлоҡ үҙенән үҙе ойошоу көсө булырға тейеш. Уны ҡайҙандыр ситтән килеп, ниндәйҙер бер аҡыллы кеше ойоштора алмай, йәмғиәттә үҙойошоу сифаты булырға тейеш. Йәмғиәт тип бөтә кешелекте, дәүләтте лә әйтергә мөмкин, һәр бер коллектив та үҙенә күрә йәмғиәт.

### Йәмғиәттең төп нигеҙе

Заманында колхоздар ниңә юҡҡа сыҡты? Ана шул үҙенән-үҙе ойошоу булманы. Ғаилә лә тарҡалып китә, сөнки кеше үҙенең йәшәү мәғәнәһен ғаиләнең, йәмғиәттең йәшәү мәғәнәһенә ҡаршы ҡуя. Шул арҡала хатта ҙур йәмғиәт үҙе лә тарҡала. Тарҡалыуҙың оло бер бәләһе коррупция тип атала. Был нимә тураһында һөйләй? Тимәк, кеше йәмғиәттең байлығын үҙенең файҙаһына урлай. Уғрылыҡ бөтә донъя диндәрендә, бөтә гуманитар фәндәрҙә иң насар сифаттарҙың береһе һанала. Шул афәт социаль системаның берләшеүен, уның ойошоу сифатын юҡҡа сығара. Халыҡ бит аңлай һәм коррупцияға батҡан хөкүмәтте, уғры чиновниктарҙы күрә алмай башлай һәм ҡапма-ҡаршылыҡ барлыҡҡа килә, сыуалыштар башлана. Күптәрҙә, мин дә шулай итә алам, тигән аҫтыртын уйҙар барлыҡҡа килә һәм ул да шул кире юлға баҫа. Ҡайны бер етәкселәрҙә коррупцияла гәйепләп эштән сығара башлағайнылар, бер минме ни, тигән аҡланыуҙар өҫкә ҡалҡып сыҡты. Сөнки вазифа биләгән кеше урлашырға тейеш һымаҡ күренә башланы, сөнки уға хөкүмәттекен урларға мөмкинлек бирелгән.

Бөтәһе лә урлашҡас, ундай йәмғиәт ҡайҙа бара? Шул уғрылар беҙҙең елкәлә йәшәй. Ярай, хәҙер үтә күренмәле система, тибеҙ, әммә уны ла бит әҙәм балаһы үҙе булдыра һәм шул система менән үҙе идара итә. Ул бит беҙҙән башҡа икенсе планетала йәшәмәй, коррупционер һәр системаға яраҡлаша белә, эште үҙенең файҙаһына бора, үҙ мәнфәғәтендә ҡуллана башлай.

Ниндәй генә инструментты алмайыҡ, уны яҡшылыҡ өсөн дә, насарлыҡ өсөн дә ҡулланып була. Төптән уйлағанда, идара итеү рухи, мәҙәни ҡиммәттәре булған нормаларға таянып башҡарылырға тейеш. Кешенең мораль яҡтан таҙалығы һәр йәмғиәттең төп нигеҙе. Уны тормошҡа ашырыуҙа динден, фәнден, белем биреү, тәрбиәләү системаһының роле ҙур.

### Белем һәм тәрбиә

Синергетика фәне өйрәтеүенсә, төп ҡиммәттәрҙең һаҡланыуы һәм бер йүнәлештә булыуы бик мөһим. Юғарыла әйтелгәндәрҙән сығып фекер йөрөткәндә, беҙҙең йәмғиәттә эштәр шәптән түгел. Мәҫәлән, белем биреү системаһын баҙар шарттарына күсерәбеҙ тип, уны белем биреү хеҙмәте күрһәтеүгә әйләндерҙек һәм аҡсаға бәйләнек - күпме сәғәт дәрес үткәрһәң, шул тиклем аҡса алаһың һәм белем биреү менән генә шөғөлләнергә тейешһең. Ә бит белем биреү һәм тәрбиәләү бер үк юҫыҡта алып барылырға тейеш, шуныһыҙ йәмғиәттә аҡыллы кешеләр үҫтереү мөмкин түгел. Аҡыллы кеше белемле генә түгел, ул мораль яҡтан да бик юғары кимәлдәге кеше. Шунһыҙ йәмғиәттең, илдең киләсәге юҡ. Тәрбиә биреүҙе һәм белем биреүҙе һис тә айырып ҡарарға ярамай. Минең уйымса, тәрбиәләү хатта беренсел булырға, һис юғы, тигеҙ күләмдә булырға тейештәр - береһенә лә өҫтөнлөк бирелмәй, улар бер бөтөндө тәшкил итә.

Шунан сығып, белем биреү системаһында эшләгән уҡытыусының, хеҙмәткәрҙең эше бик юғары баһаланырға тейеш, эш сәғәтенә ҡарап түгел, тип әйтәм. Хәҙер, ярай, класс етәксеһенә түләү индерә башланылар, тик уҡытыусылар етешмәү арҡаһында ике уҡытыусының эшен бер уҡытыусы алып барырға мәжбүр. Кешене тәрбиәләү, белем биреү бик күп көс талап итә, шуға ҡарамай, хәҙер уҡытыусыларға бик күп эш йөкмәтелә. Шуға ул вазифаһын урынына еткереп үтәй ҙә алмай. Етмәһә, йәштәр уҡытыусы һөнәре буйынса эшләргә атлығып та тормай, изге профессияның престижы ныҡ төшөп китте. Бюджетта эшләгәс, уҡытыусылар административ баҫымға ныҙыраҡ эләгә. Мәҫәлән, йәш белгескә уға бөтөнләй ҡағылмаған эш бирәләр икән, ул, мин быны эшләмәйем, ул миңә ҡағылмай, тип әйтә алмай, сөнки уҡытыусы бөгөн үҙенә үҙе хужа түгел, ул ошо бюрократик машинаның винтигына әйләнгән. Шул хәлдәге уҡытыусы ниндәй тәрбиә бирә алһын? Бюджеттан белем биреү системаһына аҡса йәлләү, әлбиттә, кире һөҙөмтә бирә.

### Фундаменталь факторҙар

Һаулыҡ һаҡлау системаһында ла шул уҡ хәл. Ҡалдыҡты биреү принцибы буйынса эшләү дөрөҫ түгел. Кешенең һаулығы, йәмғиәттең киләсәге өсөн фундаменталь фактор булып тороуға ҡарамаҫтан, баҙар продуктына әйләнһә, медицинаның бөтә мәғәнәһе үҙгәрә, ул кешенең һаулығын ҡайғыртмай башлай. Был осраҡта ауырыу кеше ни тиклем күберәк булһа, һаулыҡ системаһы аҡсаны күберәк эшләй булып сыға, сөнки баҙар системаһы буйынса клиенттар күберәк булған һайын килем күберәк була. Медицина кешене дауалау, профилактика менән шөғөлләнмәй, ауырыуҙы клиент ҡына итеп күреп, аҡсаһын һауа. Бөгөнгө медицина шуға әйләнеп бөттө тигәндә лә була, сөнки аптекалар төп урынды биләй һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә. Һаулыҡ һағындағы врачтарҙы ла был система үҙенең орбитаһына ала, бергәләп аҡса эшләй.

Быны ябай халыҡ, әлбиттә, һиҙә, Аллам һаҡлаһын, дауаханаға барырға Хоҙай ҡушмаһын, тиҙәр, клиент итеп күрмәй, кешегә һанаған табиптарға күренергә тырышалар. Был дөрөҫ түгел, сөнки белем биреү, тәрбиәләү, фән, кеше һаулығы - улар фундаменталь факторҙар. Кешенең үҙен дә бер бөтөн итеп күҙ алдына килтереп, бер бөтөн итеп аңлау ҡеүәһе түбән һәм уны аңларға тырышыу ҙа юҡ. Һәр кем үҙенең симптомдары буйынса, йөрәге ауыртһа - кардиологҡа, үпкә ауырыуы менән пульмонологҡа бара. Уларҙың һәр береһенең үҙ өлкәһендә яҡшы белгес булыуы хуплап ҡабул ителә. Мәҫәлән, офтальмолог тик күҙҙе генә белә һымаҡ. Әммә күҙҙәр организмдың башҡа ағзалары менән тығыҙ бәйләнгән бит, сөнки кеше организмы бөтөн бер системаны тәшкил итә. Ул ғына түгел, хәҙер бөтә фәндәрҙә лә үҫеш шундай юҫыҡта бара, конвейерҙарға һымаҡ. Маркс яҙған бит, кеше хеҙмәте машинаның ҡушымтаһына әйләнә, тип. Ундай кеше үҙен-үҙе итирам итмәй башлай, үҫеше булмай. Шуның арҡаһында йәмғиәт артҡа тәгәрәй, кешеләр робот һымаҡ эшләй башлай. Шундай хәлдәр бара хәҙерге заманда.

### Үҙойошоу системаһы

Дөйөмләштереүсе фән булараҡ, синергетика төрлө йүнәлештәрҙе бергә ҡушыуҙы беренсе урынға ҡуя. Ғалим шул юҫыҡта эшләнә генә был фәндең кәрәклеген, мөһимлеген аңлай ала. Ҡыҙғаныска, ундайҙар әлегә күп түгел, беҙҙә ғәҙәт буйынса тар белгестәргә һәм анализаторҙарға өҫтөнлөк бирелә, синтезлаусылар ситтә ҡала килә. Шуға күрә фәндең үҫеше кәрәккәнсә тиҙ бармай.

Рәсәйҙә әлегә синергетиктарҙың төрлө фән әйәләрен туп-

**йәмғиәт хәленә битараф**

> ***Белем биреү системаһын баҙар шарттарына күсерәбеҙ тип, уны белем биреү хеҙмәте күрһәтеүгә әйләндерҙек һәм аҡсаға бәйләнек - күпме сәғәт дәрес үткәрһәң, шул тиклем аҡса алаһың һәм белем биреү менән генә шөғөлләнергә тейешһең. Ә бит белем биреү һәм тәрбиәләү бер үк юҫыҡта алып барылырға тейеш, шунһыҙ йәмғиәттә аҡыллы кешеләр үҫтереү мөмкин түгел. Аҡыллы кеше белемле генә түгел, ул мораль яҡтан да бик юғары кимәлдәге кеше. Шунһыҙ йәмғиәттең, илдең киләсәге юҡ. Тәрбиә биреүҙе һәм белем биреүҙе һис тә айырып ҡарарға ярамай. Минең уйымса, тәрбиәләү хатта беренсел булырға, һис юғы, тигеҙ күләмдә булырға тейештәр - береһенә лә өҫтөнлөк бирелмәй, улар бер бөтөндө тәшкил итә.***

**✓ Кәсеп итеүсе һөнәрселек кооперациялары һәр бер районда булды, ат сбруйы, арба-сана эшләүсе айырым кооперативтар уңышлы эшләйҙәр ине. Хрущев заманында уларҙы ла бөтөргәндәр.**



# БЕЛГӘН - ЙӘМҒИӘТ,

## булмаған зыялылар бармы?

лаған формаль булмаған ойошмаһы барлыҡҡа килде. Хакендан, нимә ул синергетика, тип һорағандар. Төрлө фән ғалимдарының бер форумға йыйылып, ҡатмарлы системалар тураһында фекер алышып, уртаҡ тел табыуы синергетика була, тип яуап биргән ул. Беҙ төрлөсә тәрбиәләнгәнбеҙ, мәҫәлән, мин, политэкономист булараҡ, Маркс теорияһының нигеҙендә уҡығанмын. Уның "Капитал"ы капитализмды система тип анализлай. Ул социаль-иҡтисади формация булып, бөтә илдәрҙә лә таралған. Бында капиталистарҙың власын һаҡлау һәм үҫтереү маҡсатында иҡтисад та, сәйәсәт тә, мәҙәниәт тә - бөтәһе лә бер йүнәлештә эшләй.

Социализмдың ундай системалы теорияһы булманы, булыуы мөмкин дә түгелдер. Әммә антикапиталистик система булырға тейеш. Октябрь революцияһына тиклем кооперация теорияһы яҡлылар башлыса Рәсәй ғалимдары булған, көнбайыш ғалимдары практик яҡтан үҫешен ҡайғыртҡан. Социализмдың нигеҙе ана шул кооператив система булырға тейеш булған. Был системаның ҡайһы йүнәлеше коммунистар менән уртаҡ тел таба алмаған һуң? Ленин бит кооперацияға ҡаршы булмаған. Яңы иҡтисади сәйәсәт (НЭП) ваҡытында ул уға үҫергә мөмкинлек биргән. Рәсәй бер нисә йылда бөтөн күрһәткестәр буйынса революцияға тиклемге кимәлгә ҡайтҡан хатта. Тик 1921 йылда башланған был сәйәсәт коллективлаштырыу осоронда юҡҡа сыға. Сөнки ундай системала йәшәү, уны төҙөү өсөн кеше үҙе лә үҫешергә, шул кимәлгә тейешле белем алырға, әхлаҡи яҡтан юғары булырға тейеш.

Үҙҙәре аңлап, кооперативты кешеләр үҙҙәре төҙөргә тейеш, кемдеңдер өҫтән төшөргән күрһәтмәһе буйынса түгел. Ул аҫтан килә, үҙойошоу системаһы шулай эшләй, бындай иҡтисад синергетик ҡарашҡа тап килә. Шул шарттар булмағас, донъяла иң алда барған Рәсәй 1930 йылдарҙа барған юлынан ситкә тайпыла. Әлбиттә, быны башҡа күп сәбәптәр менән дә аңлаталар, әммә был социаль-иҡтисади тәжрибә булып тарихҡа инган, ҡайһы бер ярсыҡтары аҙаҡтан да һаҡланған. Мәҫәлән, кәсеп итеүсе һөнәрселек кооперациялары һәр бер районда булды, ат сбруйы, арбасана эшләүсе айырым кооперативтар уңышлы эшләйҙәр ине. Хрущев заманында уларҙы ла бөтөргәндәр. Урындарҙағы локаль иҡтисад шулай юҡҡа сыҡҡан. Уны бөтөрөү - бер нәмә, юлдан тайпылыу аяныслыраҡ.

Административ системаның бөтә нәмәне үҙ мәнфәғәтенә бороуы, үҙ ихтыяжына ябраҡлаштырып үҙгәртә башлауы ҙур хата. Рәсәйҙең дөрөҫ юлы булған. Үҙойошоу системаһы тиң коммуникацияға, йәмғиәттең бөтә өлөштәренең дә тиң хоҡуҡлы булыуына таяна. Административ-дәүләт структураһына монополия булғанда, ул, аҙаҡҡы сиктә, үҙ ихтыярын көсләп таға башлай, күп һәйбәт башланғыстар юҡҡа сыға.

### Физиктармы, лириктармы?

Уртаҡ дөйөм ҡиммәттәр, уртаҡ маҡсаттар, принциптар диалогта барлыҡҡа килә, һәр кеше, төрлө ойошмалар, төрлө конфессиялар, профессиональ ойошмалар шул диалогта тигеҙ ҡатнашалар, кемдер берәү юғарынан бойороҡ бирмәй. Административ система ла тигеҙ шарттарҙа диалогта ҡатнашырға тейеш, шундай мөхит булмаһа, кем власты ала, шул идара итә башлай. Бер мәл технократтар өҫтөнлөк алды, гуманитарийҙар, йәмғиәт белгестәре ситкә этәрелделәр. Физиктар һәм лириктар араһында ла аңлашмаусанлыҡ осоро булып алды. Педагогика фәнме ни, иҡтисад фән түгел, социология тигән фән булмай, психологтарҙы, генетиктарҙы репрессияларға кәрәк, улар фән менән шөғөлләнмәй, әллә ниндәй юҡбар менән була, тигән мәлдәр ҙә булды. Фән өлкәһендә шундай хәл ҡабатланыуы мөмкин.

### Етештереүсәнлек файҙағамы?

Үҙойошҡан системаларҙы халыҡ күтәреп алып китһә, күҙәтеп тороусылар күп, улар тиҙ генә шул йүнәлеште ҡулдарына ала ла, үҙҙәренең файҙаһына боралар ҙа ҡуялар. Әйтәйек, йәшел иҡтисад шуның арҡаһында донъялағы финансты, иҡтисадты ҡулдарында тотҡан транснациональ компанияларҙың ҡоралына әйләнде. Йәнәһе, тик уларҙың ғына бөтөн донъяла тәртип урынлаштырыуға хоҡуҡтары бар, тик улар ғына күберәк файҙа алырға тейеш. Миҫалға углекислый газ ташландыҡтары менән һатыу итеүҙе алайыҡ. Билдәле, бөтөн бысраҡ производство - артта ҡалған илдәрҙә. Улар баҡырҙы таба, иретә, ә ҡатмарлы производствоға ҡарағаны - алдынғы илдәрҙә. Парадокс нимәлә? Һауаға зарарлы матдәләр сығарған өсөн артта ҡалған илдәр штраф түләргә тейеш, ә производствоның унайлы, аҙаҡҡы циклындағылар килем ала, экологтарҙың санкциялары уларға ҡағылмай. Ауыл хужалығы, сеймал табыу сәнәғәте беренсел тармаҡҡа ҡарай, производствоның нигеҙен тәшкил итә, үҙҙәре өсөн бик комфорт булмаған шарттарҙа эшләй.

Ғилләнимәлә? Улар етештереүҙе арттырһалар, тауарҙың хаҡы төшә, сеймалдың ҡәҙере булмай, улар үҙҙәренә үҙҙәре зыян эшләй килеп сыға, масштабты арттырыу һөҙөмтә бирмәй. Ә бына ҡатмарлы, аҙаҡҡы циклдағы продукциялар һөҙөмтәле масштаб арттырып ала. Мәҫәлән, Microsoft компанияһы, йә башҡа шундай компаниялар программалары ни тиклем кинерәк ҡулланылһа, шул тиклем күберәк килем ала. Юғары технологик тармаҡтарҙа етештереүсәнлек уларҙың файҙаһына, беренселдәр зыян күрә. Был тәртипте тота килеп бер көндә үҙгәртеп булмай.

### Һинең ҡайғың төштән һуң

Синергетика фәнен таратыуы ҡыйын, сөнки бөгөнгө ваҡытта фәндең үҫеше икенсе юҫыҡта, тар специализация юлы менән бара, йәмғиәтте бер бөтөн итеп күҙ алдына килтереү юҡ. Гуманитар, социаль фәндәрҙе хәҙер нисек ҡулланалар? 90-сы йылдарҙа Рәсәйҙәме, сит илдәме, ниндәйҙер яңы теория тәҡдим итһәләр, яңылыҡ асһалар, уның асылы иң тәүҙә китаптың исемендә сағыла. Мәҫәлән, ошоноң кеүек исем булыуы ихтимал: "Иҡтисади психологияны ҡулланып, нисек итеп тиҙ генә байырға була?" Шулай итеп, замана ғалимдары үҙҙәренең асыштарын кешенең индивидуаль файҙаһына бороп яҙалар, шәхси йүнәлеш бөтәһендә лә төп роль уйнай, йәнәһе, мин йәмғиәттәге, иҡтисадтағы шарттарҙы үҙемдең файҙама ҡулланырға тейешмен. Быны шуның арҡаһында гуманитар, иҡтисад фәндәрендә үҙенә күрә бер кризис барлыҡҡа килде, сөнки был төп принципҡа яуап бирмәй. Социаль-гуманитар фәндәр йәмғиәттә берҙәмлек, ойошҡанлыҡ булһын өсөн эшләргә тейеш, һәр кем үҙен генә ҡайғыртырға тейеш түгел, ә йәмғиәттең киләсәген ҡайғыртырға тейеш. Йәмғиәтте һәм кешене өйрәнгән фәндәр ҙа ана шул төп, кәрәкле йүнәлешкә бик ауыр киләләр. Шуның арҡаһында фәндең йәмғиәтте камиллаштырыуҙағы роле бик түбән.

### Бөтөн өлөштән мөһим

Синергетика дөйөм принциптарҙы, талаптарҙы, маҡсаттарҙы алға ҡуйып үҫешә - бөтөн өлөшкә ҡарағанда һәр саҡ мөһим. Әгәр глобаль кимәлдә ошо конфликтты хәл итмәһәк, уны һуңғы сигенә еткерһәк, әгәр фән шул йүнәлештә бармаһа, беҙҙе донъя кимәлендәге катастрофа көтә. Бер-беребеҙҙе юҡ итәбеҙ, тип, бөтөн кешелекте юҡҡа сығарырға мөмкин. Ул катастрофа һуғыш, экология арҡаһында булыуы ихтимал. Йә иһә ниндәйҙер технокатастрофа көтә беҙҙе. Хәҙерге капиталистик донъя ҡоролошон олигархик донъя ҡоролошо тип атайҙар. Капитализмдың тәүге ҡайһы бер этаптары, кешелек өсөн, бәлки, файҙалы ла булғандыр. Мәҫәлән, конкуренцияны алайыҡ. Әммә уның донъялағы ҡара көс булып ойошоуы, сәйәси, иҡтисади, әхлаҡи яҡтан башҡалар тик уларға буйһонорға тейеш тип, үҙҙәрен юғары ҡуйыуы бөтөн кешелеккә ҡаршы эшләй. Донъя тарҡау булһа, йәмғиәттәр ыҙғышып йәшәһә, уларға үҙ маҡсаттарын тормошҡа ашырыуы шул хәтле еңелерәк. Гегемон булыр өсөн улар аҡса йәлләмәй, санкциялар ҡуллана, локаль һуғыштар башлай.



**Матди нәмәләр була ла бөтә, ә фекер конструкциялары ғүмерлеккә ҡала, артабанғы үҫешкә нигеҙ була. Әгәр синергетика фәне үҫешһә, идара итеү системаһы һөҙөмтәле системаға әйләнәсәк, хатта дәүләт ҡоролошо үҙгәреп китеүе лә ихтимал. Әлбиттә, былар тиҙ генә, бөгөн-иртән була торған хәл түгел. Уның өсөн дәүләттә, йәмғиәттә лә интеллектуаль үҫеш булырға тейеш. Шул фекерләү өлкәһендә тәрбиәләнгән етәкселәр, лидерҙар сыҡмаһа, алға китеш булмай, бар йәмғиәт юғары кимәлдә уйлай башламаһа, үҙ-ара аралашмаһа, илдә үҫеш тә булмай.**

### Уйландыра уйсан ирҙәрҙе

Ҡыҙғанысҡа, фән менән шөғөлләнгәндәр һирәгәйгәндән-һирәгәйә, фәнгә аҡса биреүҙән файҙа юҡ, тигәндәр, киреһенсә, күбәйә бара. Үҙҙәренә үҙҙәре аҡса эшләгән лабораториялар файҙалы бөгөн, матди килем килтермәгән социаль-гуманитар фәндәр ситкә тибелә. Әлбиттә, беҙҙән матди төшөм юҡ, беҙ фекер үҫтерәбеҙ. Матди нәмәләр була ла бөтә, ә фекер конструкциялары ғүмерлеккә ҡала, артабанғы үҫешкә нигеҙ була. Әгәр синергетика фәне үҫешһә, идара итеү системаһы һөҙөмтәле системаға әйләнәсәк, хатта дәүләт ҡоролошо үҙгәреп китеүе лә ихтимал. Әлбиттә, былар тиҙ генә, бөгөн-иртән була торған хәл түгел. Уның өсөн дәүләттә, йәмғиәттә лә интеллектуаль үҫеш булырға тейеш. Шул фекерләү өлкәһендә тәрбиәләнгән етәкселәр, лидерҙар сыҡмаһа, алға китеш булмай, бар йәмғиәт юғары кимәлдә уйлай башламаһа, үҙ-ара аралашмаһа, илдә үҫеш тә булмай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт халыҡ йыры "Уйыл"да шундай һүҙҙәр бар: "Уйылып ҡына аҡҡан Уйыл һыуы уйландыра уйсан да ирҙәрҙе". Уйланырға күптән ваҡыт түгелме, йәмәғәт? Еңел-елпе тормошҡа йәбешеп, хаттин ашып киттек түгелме? Уйылар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

✓ *Ошо ҡәһәрле Бөйөк Ватан һуғышы күп солоҡтарҙы хужаһыҙ ҡалдырҙы шул. Әле лә урманда етемһерәп ҡалған солоҡло ҡарағайҙар байтаҡ. Уларҙың һәр берее үҙ хужаларын тапһа, ҡортло булһа, бик мәслихәт инде.*



ҺАБАҠТАР

# ҠОТҠАРЫҒЫҘ! ҠОРТТАР БАҪТЫРА МИНЕ!

## (Үткән быуаттың 60-сы йылдарында булған хәл).



Түмәр-умарта юнып йөрөгән Исҡужа бабай ҡапҡаның ризаһыҙ ғына шығырлап асылып-ябылыуына башын күтәреп ҡараны. Урам осонда йәшәгән ҡорҙаштың улы инеп килә икән. Яңы ғына урам буйлап сыбыҡты ат итеп менеп сабып йөрөгән малай ине. Ә хәҙер, ана, ниндәй мыҡты ир булып киткән. Хәҙер ул үҙе өс балаға атай. Әй, ваҡыттың үтеүҙәре, һыу һымаҡ ағыуҙары...

Ә шулай ҙа нишләп кисләтеп кенә йөрөй икән ул? Ярай, сәбәпеҙ-ниһеҙ йөрөмәйҙер. Һорашайыҡ, белешәйек, шунан күҙ күрер. Аллаға шөкөр, ҡорҙаштың улынан һәйбәт солоҡсо сығырға тейеш. Әле ул леспромхозда эшләп йөрөй. Ә шулай ҙа урманға йөрөргә, атаһы-олатаһының солоҡтарын табырға, уларҙы рәткә-тәртипкә килтереп ябырға ваҡыт таба. Маладистан башҡа һүҙ юҡ уға. Ошо ҡәһәрле Бөйөк Ватан һуғышы күп солоҡтарҙы хужаһыҙ ҡалдырҙы шул. Әле лә урманда етемһерәп ҡалған солоҡло ҡарағайҙар байтаҡ. Уларҙың һәр береһе үҙ хужаларын тапһа, ҡаралы булһа, иң мөһиме, ҡортло булһа, бик мәслихәт инде. Йәш солоҡсоно әйтәм, моғайын да олатаһының берәй солоғо тураһында һорашырға, белешергә килгәндер әле. Әммә унын борсоулы йөҙөнә күҙ һалыу менән, ҡапҡа ризаһыҙ ғына шығырлап бушҡа асылмаған икән, тип уйлап ҡуйҙы Исҡужа бабай.

Йәш солоҡсо һөйләгән хәбәрҙән һуң Исҡужа бабай бер мәлгә баҙап ҡалды. Ул ҡайтып киткәс, ҡулына һис кенә лә эш барманы. Йә, бөгөнгә етәр, йә түмәр-умартаны боҙоп ҡуйырмын, тип балтаһын түмәргә сапты. Бағау-бөрөздәрҙе лапаҫҡа индереп элде. Аҙаҡ эскәмйәгә сүгәләне. Ишеткән хәбәрҙе уйлап, оҙаҡ һеңгәҙәп ултырҙы оло солоҡсо. Тегеләй уйлап ҡараны, былай уйлап ҡараны. Аҙаҡ аптырап ҡул һелтәп ҡуйҙы. Ишеткән ауыр яңылыҡты зиһене аңланы, ә күңеле ҡабул итә алманы. Ошолай күпме ултырғандыр инде ул, белмәйем. Әбейе сәй эсергә саҡырғас ҡына, ауыр ҡуҙғалып, өй яғына табан ыңғайланы. Әммә сәй эсеүенең дә, һөйләгән һүҙенең дә рәт-сираты булманы. Тәмен-нейен тоймай, бер-ике сынаяҡ сәйҙе шөрпөлдәтте лә хуш итеп тороп та китте. Төнө буйы ла йоҡлай алмай борғаланып сыҡты ул. Тегеләй әйләнеп ятып ҡараны, былай әйләнеп ятып ҡараны. Әммә тынғыһыҙ уй уға йоҡларға ирек бирмәне. Уяулы-йоҡоло саҡ үткәрҙе ул был төндө.

Иртәнге намаҙын башҡарып алғас, Исҡужа бабайҙың күңеле бер аҙ тынысланғандай булды. Ул намаҙлығын-тиҫбеһен рәтләп һалды ла Ғабдулхаҡ олатаһынан мираҫ булып ҡалған Ҡөрьән китабын кәштәнең иң үренә һөйәп ҡуйҙы. Аҙаҡ һикәлтәгә сығып баҫты. Бер аҙ тора биргәс, ауыр уйҙар уны йәнә ялмап алды. Уң ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, ҡараштарын ауыл буйлап йөрөтөп сыҡты. "Ошо мәлғүн кеше беҙҙең менән бергә йәшәй, бергә эшкә йөрөй, бергә ҡунаҡтарҙа ултыра, кешегә ҡушылып матур һүҙҙәр һөйләй", тип уйлап әрнеп ҡуйҙы ул. Нисек ундай кешене мәлғүн тип атамайһың инде, әгәр ул күрәләтә бал ҡорттарын үлемгә дусар итеп йөрөһә! Ҡорҙаштың улы һөйләүе буйынса, бына бер нисә йыл рәттән кемдер берәү унын солоғонан балды тулыһынса ҡырып ала! Етмәһә, көҙ көнө! Солоҡто ҡышҡа әҙерләгәндән һуң! Аслыҡҡа дусар булған бал ҡорттары ҡыштың тәүге һыуыҡтарына етмәй үлә! Их, белһә ине был мөртәт бал ҡортоноң ҡарғышы ниндәй ҡаты икәнен, тип әсенеп уйлап ҡуйҙы оло солоҡсо. Һораһа, балын үҙем дә бирер инем, бал ҡорттарын йәлләйем, тип әсенә йәш солоҡсо.

Кире өйгә инеп торманы Исҡужа бабай. Һикәлтәнән яйлап төштө лә күп ултырыуҙан шымарып бөткән ҡаты эскәмйәгә барып сүгәләне. Унын ысыҡ төшкән таҡтаһына ла иғтибар итеп торманы. Ҡорҙаштың улына ниндәй кәңәш бирергә? Бына ошо уй борсой ине оло солоҡсоно. Ултыра биргәс, борон тәртип булған шул, тип көрһөнөп ҡуйҙы Исҡужа бабай. Элек ара-тирә тәртип боҙоусылар булды, тип һөйләй торғайны унын атаһы Йәһүҙә. Кемдер берәү бесән мәлендә кеше солоғонан сәй эсерлек бал алған. Выҡыты менән бәғзе солоҡсо сиктәш биләмәгә "яңылыштан" ғына инеп солоҡ юнған. Ара-тирә тамға өҫтөнә тамға һуғылған талашлы солоҡло ҡарағай ҙа осрап торған. Ә күрәләтә бал ҡорттарын үлтереүгә... Аллам һаҡлаһын! Бындай ҡырын эшкә берәүҙең дә ҡулы бармаған. Унан бигерәк, йөрәге етмәгән. Эх, элекке заман булһа, оло солоҡсоларҙы йыйып алыр инем дә һөйләшер инем, тип уйлап ҡуйҙы Исҡужа бабай. Борон тәртип булған шул. Барлыҡ мөһим мәсьәләләрҙе оло солоҡсолар йыйылышып-кәңәшләшеп хәл иткән. Иң мөһиме, ғәҙел хәл иткән. Башҡаларға һабаҡ булыр язаһы ла апаруҡ ҡаты булған.

Бер аҙ төшөнкөлөккә бирелеп киткән Исҡужа бабай үҙе лә һиҙмәҫтән осо ла, ҡырыйы ла булмаған уйҙар-хәтирәләр донъяһына сумып китте. Бына ул атаһы Йәһүҙә менән тәү тапҡыр урманға юллана. Ул мәлдә уға нисә йәш булды икән? Һигеҙ, уҙа барһа туғыҙ йәш булғандыр. Быға тиклем дә йөрөмәне түгел, йөрөнө ул урманға. Иҫәпкә бар, һанға юҡ кимәлендә инде. Ә бөгөн ул иҫәптә бар. Бөгөн уға тәү тапҡыр ышанып эш тапшырҙылар. Исҡужа - солоҡсо ярҙамсыһы! Унын тәғәйен эше бар! Был мәлде уйлап, Исҡужа бабай йылмайып ҡуйҙы. Ә мәлендә атҡа һыбай менеп ултырған бәләкәй баланың ауыҙы ҡолағына еткәйне. Ауыл урамы буйлап үткән мәлдә бәләкәй Исҡужаға һәр осраған кеше һоҡланып ҡарағандай тойолдо. Бары тик ауыл урамы ғына бик ҡыҫҡа булды шул. Һыбайлылар уны һә тигәнсе үттеләр ҙә ҡара урманға инеп, юҡ та булдылар. Һыбайлылар урман буйлап әллә ни оҙаҡ барманы. Тәүге шишмәгә етеү менән атаһы аттан төштө. Шунан үҙ атын теҙгененән йәш ҡайынға бәйләп ҡуйҙы. Ә Исҡужанын атын иркенгә ебәрҙе. Әсәһен ташлап, бер ҡайҙа ла китмәй ул, тип үҙ алдына әйтеп ҡуйҙы ул. Шунан атаһы тәһәрәтләнеп алды ла намаҙ башҡарырға ниәтләне. Был намаҙ - сәләм намаҙы. Урманға сәләм биреп, унан рөхсәт алып, үҙ ниәттәреңде әйтеп инер кәрәк, тип аңлатты солоҡсо улына. Баҡтиһәң, был тәртипте үтәмәү - оло гонаһ икән! Атаһы менән бергә намаҙ башҡарып алғас, ниндәйҙер күңел тыныслығы кисерҙе бәләкәй бала.

Һиҙелер-һиҙелмәҫ һуҡмаҡ һыбайлыларҙы солоҡҡа алып килеп еткерҙе. Атаһы аттарҙы утыҙ-ҡырҡ аҙым ситтәрәк бәйләне лә кәрәк-яраҡтарын йөкмәп, ҡалған яғына йәйәү атлап китте. Бер аҙ артта ҡалып килгән Исҡужа солоҡло ҡарағайҙы күреү менән унын мөһәбәтлегенә иҫе китте. Хатта ул ирекһеҙҙән туҡтап ҡалды. Ул ҡарағайҙың йыуанлығы... Унын бейеклеге... Сатырының ялбырлығы... Ғорур үҫеп ултырыуы... Шул арала ҡарағай төбөнә барып еткән атаһы, доға уҡып, битен һыйпап ҡуйҙы. Унын эргәһенә килеп баҫҡан улының арҡаһынан еңелсә ятатып алды. Солоҡсолар бер мәлгә генә тын ҡалып, гөжләп осҡан бал ҡорттарын эске кинәнес менән күҙәтеп торҙо. Ошо мәлдә атаһы әллә үҙ алдына, әллә улына төбәп әйтеп ҡуйҙы.

- Бал ҡорттары беҙгә Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән бүләк. Был турала Ҡөрьән китабында әйтелә. Бындай мәртәбәле бүләкте ҡәҙерләп һаҡлау - беҙҙең изге бурыс!

Был мәлдә бер күҙен ҡыҫа биреп, башын мөмкин тиклем үргә сөйөп торған бала атаһының әйткән был һүҙҙәрен аңланы микән? Юҡтыр, моғайын. Ул мәлдә бәләкәй Исҡужа өсөн гөжләп осҡан солоҡ ҡорттарынан алған тәьҫорат күпкә көслөрәк булғандыр. Әммә Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте киң, атаһының был һүҙҙәре бала күңеленең төбөндә уйылып ҡалған икән! Әйтерһең дә, ошо мәл күптән мәрхүм атаһы Йәһүҙә (урыны йәннәттә булһын) эскәмйәлә ултырған һикһән йәшлек улының ҡолағына ошо изге һүҙҙәрҙе тағы берҙе ҡабатлап әйтте.

- Бал ҡорттары беҙгә Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән бүләк. Был турала Ҡөрьән китабында әйтелә. Бындай мәртәбәле бүләкте ҡәҙерләп һаҡлау - беҙҙең изге бурыс!

Бындай мөғжизәне көтмәгән Исҡужа бабай бер мәлгә албырғанып ҡалды. Хатта эскәмйәнән ҡалҡына биреп ҡуйҙы. Маңлайынан килеп сыҡҡан тирҙе ҡул һырты менән һөрттө. Аҙаҡ эскәмйәгә кире сүгәләне. Бер аҙ тынныслана биргәс, Исҡужа бабай йылмайып ҡуйҙы.

- Атайымдың был һүҙҙәре миңә унын васыяты булған икән!

Ултыра биргәс, үҙ алдына әйтеп ҡуйҙы:

- Бөгөн был васыятты замана солоҡсоһона ла еткереү кәрәктер!

Күңелендә ниндәйҙер тыныслыҡ тапҡан Исҡужа бабай оҙаҡ ҡына ултырҙы әле тышта. Аҙаҡ эскәмйәнән еңел генә торҙо ла ныҡлы аҙымдары менән өйгә табан атланы. Бисмилла әйтеп, Ҡөрьән китабын ҡулына алды ла бал ҡортона ҡағылышлы сүрәне тағы берҙе иғтибар менән уҡырға тотондо. Күптәр белә, мосолмандарҙың был изге китабында Бал ҡорто (Ән-Нәхл) сүрәһе иҫәп буйынса ун алтынсыһы. Унын алтмыш һигеҙенсе һәм алтмыш туғыҙынсы аяттары тулыһынса бал ҡортона бағышланған. Уларҙы айырыуса иғтибар менән уҡыны оло солоҡсо. Ғәрәп телен бер аҙ һупалаған Исҡужа бабай был аяттарҙың мәғәнәһен ошолай аңланы.

- Аллаһы Тәғәлә бал ҡортона ошолай ҡушты. Тау ҡаяларында, ағас ҡыуыштарында һәм улар (кешеләр) яһаған нәмәләрҙә үҙеңә оя яһа. Аллаһ күрһәткән юлдар буйлап ос. Сәскәләрҙең һуты менән туҡлан. Уларҙан кешеләр өсөн шифа булған бал йый. Уйлай белгәндәр өсөн бал ҡорто йәшәйешендә фәһем-үрнәк алырлыҡ урындар күп.

Ни бары ике аят, ә күпме фәһемле мәғлүмәт тупланған! Әйткәндәй, Ән-Нәхл сүрәһе йөҙ ҙә егерме һигеҙ аяттан тора. Был сүрәлә бер-береңә ҡарата ғәҙел булыу һәм биргән һүҙеңде мотлаҡ үтәү кәрәклеге тураһында айырым әйтелә икән, тип уйлап ҡуйҙы Исҡужа бабай.

Йәш солоҡсо менән һөйләшеүҙән һуң әллә ни күп ваҡыт үтмәне. Насип иткәс, Исҡужа бабайға унын үтенесен үтәргә форсаты ла сыҡты. Бына кисә генә силсәүит рәйесе үҙе уға килеп, ошондай үтенес менән мөрәжәғәт итте. Ошо арала солоҡсолоҡ кәсебенә бағышланған ҙур сара үтә. Унда һин, Исҡужа бабай, ауылдың иң оло солоҡсоһо булараҡ, сығыш яһа әле, тип үтенде ул. Бына бит, Аллаһы Тәғәлә яйын да сығарҙы, тип эстән ҡыуанып ҡуйҙы Исҡужа бабай. Ярай, Аллаһ бирһә, барырмын, сығыш яһармын, тип оҙатып ҡалды ул силсәүит рәйесен.

Әлбиттә, барҙы был сараға Исҡужа бабай. Ныҡлап әҙерләнеп барғанға күрә сығышы ла бик матур килеп сыҡты. Оло солоҡсо халыҡ кәсебен, солоҡ ҡорттарын һаҡлау кәрәклеге тураһында бик ентекле һөйләне. Бал ҡорто сүрәһе тураһында ла тыңлаусыларға еткерҙе. Йәш солоҡсо һөйләгән кире хәл тураһында ла әйтергә онотманы. Был турала Исҡужа бабай үҙ сығышында ошолай әйтте:

- Бөгөн кемдер берәү солоҡ балын урлау менән шөғөлләнә. Һөҙөмтәлә бал ҡорттары үлә. Ә бал ҡорттары был кешегә ниндәй яза бирәсәк - бөгөн ул был турала уйланмай. Әммә шуны аңлар кәрәк. Боҙоҡ кешегә ике донъяның береһендә барыбер яуап тоторға тура киләсәк. Бөгөн мин уны тәрбиәләргә лә, уға нимәлер аңлатырға ла теләмәйем. Мин уға Мифтахетдин Аҡмулланың нәсихәте менән яуап биргем килә.

*Икенсе ҡиммәт нәмә - күңел, тигән,*
*Күңеле боҙоҡ әҙәмдән төңөл, тигән.*
*Боҙоҡҡа ер өҫтөнән аҫты артыҡ,*
*Булмаһа күңел таҙа - күмел, тигән.*

Оло солоҡсоноң бындай үҙенсәлекле сығышы күптәрҙе уйға һалды, буғай. Хатта бер аҙ битараф тыңлап ултырыусылар ҙа үҙ уйҙарына бирелеп шымып ҡалды.

Ошо саранан һуң күпме ваҡыт үткәндер инде, хәҙер иҫләмәйем. Бына бер мәл ауыл осонда йәшәгән берәүҙә сәйер ғәҙәт барлыҡҡа килеүе тураһында ара-тирә хәбәр ишетелә биреп ҡалды. Имеш, ул сәй эскән мәлдә ара-тирә ҡулын һелтәп ала икән. Аптырап ҡараған ҡатынына, әй, бынау бер-ике ҡортто әйтәм, күҙ алдында тегеләй-былай осоп тик йөрөй, тип аңлата, имеш. Был ҡатын был турала күршеһенә һөйләгән, унын һы - теге күршеһенә, уныһы - юл аша күршеһенә... Шунан киткән инде был имеш-мимеш хәбәр ауыл буйлап таралып. Тора-бара был әҙәм өйҙә генә түгел, ә урамда ла ҡулы менән тегеләй-былай һелтәнеп йөрөй башлаған. Ҡаҡшатты бынау биш-алты ҡорт, күҙ алдынан китмәй осоп тик йөрөйҙәр, тип әйтә икән үҙе аптырап ҡараған кешеләргә. Күпмелер ваҡыт үткәс, тышҡа сығыр әмәл юҡ, бал ҡорттары һырып алырға әҙер тора, тип, ауыл урамы буйлап шәп-шәп йөрөй башлаған был әҙәм. Бер көн ул урамында тегеләй-былай үрһәләнеп сабып йөрөп, аҙаҡ өйөндәге баҙға ҡолап төшөп мәрхүм булып ҡалды.

Бындай насар хәбәрҙе ишеткән Исҡужа бабай ауыр көрһөнөп ҡуйҙы. Аллаһы Тәғәлә был әҙәмгә, бәлки, кемгәлер һабаҡ булһын өсөн тип был донъяла уҡ үҙ язаһын биргәндер, тигән һығымта яһап ҡуйҙы оло солоҡсо.

**Бөрйән районы**
**Ғәлиәкбәр ауылы ир-уҙаманы**
**Ғәлим Әминев һөйләгәнде**
**Әғләм ШӘРИПОВ**
**яҙып алды.**

✓ ***Бындай ҙур сараны үҙендә үткәрергә баҙнат иткән Һөйөндөк мәҙәниәт йорто мөдире, ошо ауылдың "Ағинәй" ойошмаһы етәксеһе Гөлсара Ғилман ҡыҙына һәм ауыл хакимиәте башлығы Зөлфиә Азамат ҡыҙына рәхмәтебеҙ ҙур.***



АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**Йыл башынан "Бәрәкәтле ашъяулығым биҙәге" тигән сараны планлаштырып, район мәҙәниәте бүлегенең эш планына ла индереп ҡуйғайныҡ. Ниһайәт, ноябрҙең егермеһендә, күҙ нуры түгеп, йөрәк йылыһын ҡушып сигелгән ашъяулыҡтарын алып, оҫтабикә ағинәйҙәр Һөйөндөк ауылы мәҙәниәт йортона йыйылды. Аллы-гөллө биҙәкле ашъяулыҡтар мәҙәниәт йортон йәйғор нурҙарына күмде.**

# ӨЛӘСӘЙҘӘРЕБЕҘҘЕҢ КӘСЕПТӘРЕ...

## тарих саңына күмелеп ҡалмаһын, тип





Әйе, райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары ихлас ҡушылды был эшкә лә. Шулай булмай ни, ошо йылдар эсендә улар халҡыбыҙҙың ниндәй генә кәсептәрен, оҫталыҡ серҙәрен тергеҙмәне! Был юлы ла улар башҡорттоң борондан килгән һәм ныҡ үҫешкән сигеү сәнғәте өлгөһөнә, заманында өләсәй-әсәйҙәребеҙҙең шәм яҡтыһында сиккән, нағышлаған ашъяулыҡтарына яңы һулыш өрөргә йөрьәт итте.

Бына Мулдаҡайҙан сигеү оҫтаһы Лейә апай Һағынбаева үҙе сиккән ике ашъяулыҡ менән бергә инде 120 йыл дауамында быуындан-быуынға күсә килеп, шкафында ҡәҙерләп һаҡланған ҡомартҡыны ла тотоп сыҡҡан. Был ашъяулыҡтың биҙәктәре шул тиклем тигеҙ итеп, этнографтар билдәләгәнсә, иҫәпле сигеү (счетная вышивка) алымы менән һалынған. Әйберҙең ике яғында ла тигеҙ булып ятҡан был биҙәкләү алымы бик борон замандарҙа уҡ ҡулланылған. Тауарҙың ептәрен һанап ҡына һалып барылған биҙәкләү алымына "сүпләм" һүҙен ҡулланыу уңай булмаҫмы икән, тигән фекер ҙә тыуҙы әлеминдә.

Көсөк-Маяҡ ауылындағы музейҙа һаҡланған ашъяулыҡты үткән быуат урталарында Нәғимйәнова Файза апай сигеп ҡалдырған. Төҫлө ебәк еп менән элмә сигеү (тамбурная) алымын ҡулланып һалынған биҙәкле ашъяулыҡтың тиҫкәре яғында бер генә төйөн-маҙары булмауы бигерәк аптыратты. Ауылдың ағинәйҙәре етәксеһе Гөлсирә Ғарипова ошо ашъяулыҡтың күсермәһен эшләп килтереп, быуындар бәйләнешенең дауам итеүенә матур ишара яһаны.

Балбыҡ ауылы ағинәйҙәренең дә һандығында һаҡланған ҡомартҡы бар икән. Яңыртылғанын да, ҡомартҡыны ла тотоп сыҡты оҫтабикәләр. "Был ҡомартҡының биҙәктәре шыма сигеү алымын ҡулланып һалынған. Борон ҡунаҡ йыйғанда еҙ ҡомған, еҙ тас йөрөтөп, ҡунаҡтарҙың ҡулдарын йыуҙырып, ҡоротоп алғандан һуң, уртаға ҡәҙерләп кенә ошондай ашъяулыҡтар йәйелгән. Беҙ ҙә бергә йыйылып, күмәкләп ултырып сиктек ашъяулығыбыҙҙы", - тип һөйләп алды улар.

Рысай ауылынан килгән ағинәйҙәр ҙә күмәкләп ҙур ашъяулыҡ сигеп килтергән һәм: "Ашъяулыҡҡа ҡарата халыҡ бик иғтибарлы булған. Аш-һыу теҙелә бит уның өҫтөнә. Тамаҡҡа ашап алғас та уны ҡәҙерләп йыйып алып ҡуйғандар", - тип балбыҡтарҙы йөпләп ҡуйҙылар.

Эйе, боронғо ашъяулыҡтар ыҡсым, урындыҡҡа йәйелә торған итеп тегеп-сигелгән. Беҙҙең оҫтабикәләрҙең ҡайһылары, хәҙерге өҫтәлдәргә ярарлыҡ итеп, ҙур итеп тегеп-сигеп килтергән ашъяулыҡтарын. "Аят аштарына, ҡунаҡ саҡырғанда ҡәҙерләп тотонорлоҡ булһын өсөн шулай итеп тектек",- ти улар.

Ашъяулыҡтар яҙып тотоп сығыш яһарға сыҡҡан Римма апай Байрамғолова үҙенең матур мәғлүмәттәре менән уртаҡлашты: "Ашъяулыҡты, гәҙәттә, ҡыҙылдан алғандар. Мин дә шул төҫтә һайланым да, оло өҫтәлемә йәйерлек итеп, ситтәренә лә суғын ҡуйып әҙерләнем. Биҙәктәрен ҡуш элмә менән, ҡусҡарлап һалдым. Ҡуш элмәне интернет селтәренә инеп өйрәнеп алдым. Әммә әнәне сәнсеп алыуын саҡ ҡына үҙемсә үҙгәрттем. Интернет өйрәткәнсә сәнсеп, мосолмандар мәйет күлдәген тегә. Үҙебеҙгә ҡулайлы итеп сәнсергә өйрәнгәс, ҡуш элмәне төркөмдәге башҡаларға ла өйрәттем. Ҡуш элмәне борон беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ оҫта ҡулланған. Әйткәндәй, ашъяулыҡтың ҡәҙере ҙур ине. Аша атларға ярамағанлығын һәр саҡ иҫкә төшөрөп ултыра ине өләсәйҙәр", - тип йомғаҡлап ҡуйҙы һүҙен. Уның баҙрап торған ҡыҙылға зауыҡ менән һалынған биҙәкле ашъяулығы барыһын да һоҡландырҙы. Саранын төп енеүсеһе лә ул булды.

Ибраһимова Рәзилә апай менән Рәҡипова Гөлйемеш тә ашъяулыҡтарын ҙур өҫтәлгә йәйерлек итеп эшләп алғандар. Үҙҙәре әйткәнсә, бер эшләгәндә берәгәй һәм ҡулланырлыҡ булһын, тигәндәр. Рәзилә апай биҙәкҡа өлгөләрҙе Камалиеваның "Магия башкирского тамбура" китабынан алған. Ҡулы оҫтаның эше лә уңып тора бит ул. Ҡыйып ҡарағыһыҙ ҡул эшенең биҙәктәре лә йым-йым килеп торғандай. Гөлйемеш инде ашъяулығына, аяҙ күк йөҙөндәй булһын тип, зәңгәрһыу төҫтә һайлауын аңлатты. Биҙәктәрен дә, ептәрҙең төҫтәрен дә күңеленә хуш килгәнен һайлап сиккән. Затлы, бик затлы ашъяулыҡ килеп сыҡҡан. Был оҫталар икеһе лә ҙур баһаға лайыҡ булдылар.

Сарала ҡатнашҡан һәр кем маҡтауға лайыҡ, һәр кемдең ашъяулығы үҙенә генә хас биҙәк менән балҡыны һәм һоҡландырҙы. Ашъяулыҡтарына ниңә тиге йәки был төҫтә һайлауҙарын, миләүшә һәм томбойоҡ сәскәләрен, бешкән ҡарағат төлгәштәрен ни өсөн һалыуҙарын эске бер йылылыҡ һәм ғорурлыҡ менән төшөндөрә барҙылар. Боронғоса итеп ҡусҡар, йөрәк, башҡорт тамғалары формаһындағы кеүек милли биҙәктәр һалынғанына ла тейешле аңлатма биреп, халҡыбыҙҙың ихласлығын, ҡунаҡсыллығын билдәләп киттеләр.

Ҡул эштәренән, оҫталарҙың үҙ эшен яратып һөйләүҙәренән рухланып, Римма апай Байрамғолова тағы күңеленә ҡайнаған хис-тойғолары менән уртаҡлашыуҙы кәрәк тапты:

- "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһына ҙур рәхмәтемде еткерәм. Нимә генә эшләмәнек ошо ваҡыт эсендә. Милли кейемде дөрөҫ итеп тегергә, кейергә өйрәндек. Онотолоп барған ҡораманы иҫкә төшөрөп, нимә генә ҡораманыҡ. Кейеҙ баҫырға өйрәнеп, камзулына тиклем баҫып кейҙек. Үткән ҡыш кейеҙ баҫып, олтораҡмы, ултырыу өсөн яраҡлы монаятмы итһәләр ҙә тип, һалдаттарыбыҙға оҙаттыҡ. Ер-һыу аталмаларын да, туй йолаларын да йыябыҙ. Йола тигәндән, күпме йола өйрәндек тә башҡаларға күрһәттек. Бына хәҙер ҡыҙҙарыбыҙға, ейәнсәрҙәребеҙгә ҡомартҡы итеп ҡалдырырлыҡ ашъяулыҡлы ла булдыҡ. Ашъяулыҡтарыбыҙ йорттарыбыҙға йәм, ҡот, бәрәкәт биреп торһон. Ер шарында, илдә тыныслыҡ урынлашып, именлектә йәшәргә яҙһын! Өйҙә генә ултырһаҡ, ойошторop, әйҙүкләп тороусыһы булмаһа, беҙ тергеҙгән был ҡомартҡы-хазиналарыбыҙҙың барыһы ла һиҙелмәй генә онотолоп, ваҡыт саңында күмелә барыр ине... - тине Римма апай. Рәхмәтле булдыҡ был зыялы ағинәйгә. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, "Әүеш йәшмәләре" төркөмөнөң уртаһында ҡайнап йөшәй ул, башҡаларҙы ла үҙе тирәләй әйләндерә, матур эштәргә әйҙүкләй.

Ниндәйҙер сара үткәрергә йыйынһаң да, ҡулайлы урыны ла, ҡатнашыусыларҙы дәртләндереү өсөн бүләктәре лә кәрәк бит әле. Бындай ҙур сараны үҙендә үткәрергә баҙнат иткән Һөйөндөк мәҙәниәт йорто мөдире, ошо ауылдың "Ағинәй" ойошмаһы етәксеһе Гөлсара Ғилман ҡыҙына һәм ауыл хакимиәте башлығы Зөлфиә Азамат ҡыҙына рәхмәтебеҙ ҙур. Бағыусыларын да тапҡандар, шәп бүләктәрен дә әҙерләгәндәр. Ашъяулыҡлылар ҙа, тәмле бөйөрәктәрен бешереп килтергәндәр ҙә тәғәйен бүләктәрен, Рәхмәт хаттарын алып ҡыуандылар.

Бындай күмәк сараларға бөгөн башҡа күҙлектән ҡараусылар ҙа юҡ түгелдер. Илдә тыныс булмағанда, нисек күңелдәре төшә икән, тигәндә лә ишеткеләп ҡуяһың. Миңенсә, ваҡыты-ваҡыты менән күңелдәге юшҡынды йыуып төшөрөү өсөн кәрәк бындай саралар. Юғиһә, күңелдәрҙең ҡатып китеүе лә бар. Әйткәндәй, ошо сарала ҡатнашыусыларҙан аҡса йыйып, Шайморатов исемендәге волонтерҙар клубына тапшырҙыҡ. Әлеге мәлдә һәр ауылда маскировка селтәрҙәре үрәләр, йылы ойоҡбаштар, бирсәткәләр бәйләйҙәр, кәрәк икән, аҡса йыйыуҙы ла ойошторалар. Ошондай сараларҙа ҡатнашҡан ағинәйҙәребеҙ ошо йәһәттән дә әүҙемлек күрһәтә. Сөнки һәр беребеҙҙең күңелендә бер үк теләк: һуғыш тиҙерәк туҡтап, яу ҡырында йөрөгән ир-егеттәребеҙ иҫәнһау әйләнеп ҡайтһын. Илебеҙгә именлек килеп, йорттарыбыҙҙа тыныс йәшәргә яҙһын!

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе.**

✔ *Күптәр тормоштарын баһалап ҡарайҙар, кемдәрҙер дөрөҫ эшләгән-эшләмәгән хәлдәрен иҫкә төшөрә, тегеләй йәки былай итергә кәрәк булған, тип тә уйлайҙар. Сөнки билдәһеҙ, бөгөн барһың, иртәгә - юҡ.*

ИНТЕРНЕТТАН

# ЙОҠЛАРҒА ЯРАТАҺЫҢМЫ?

■ Күптәр оҙаҡ итеп йоҡларға ярата. Бәхетиһән, йоҡо туйғансы йоҡлап алыу кәйефте күтәреп, энергияны арттырып ҡына ҡалмай, артыҡ ауырлыҡ барлыҡҡа килеүҙән дә һаҡлай икән. Колорадо университеты ғалимдары иҫәпләүенсә, яҡшы итеп йоҡлау артыҡ килограмдарҙан ҡотҡара. "Йоҡо үҙе ябығыуҙа бер роль уйнамаһа ла, матдәләр алышыныуҙа уның ярҙамы бар. Был асышыбыҙ кешеләргә көн режимына иғтибарлыраҡ булырға булышлыҡ итер, тип уйлайбыҙ", ти тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Кеннет Райт. Тикшеренеүҙәрҙә 16 сәләмәт, ябыҡ кеше ҡатнаша. Улар ике аҙна буйына университет клиникаһында йәшәй. Тәүге өс көндә тәүлегенә 9 сәғәт йоҡларға рөхсәт бирелә, әммә уларҙың туҡланыуының энергетик ҡиммәте иҫәпләнгән нормаға ярашлы ғына була. Ҡалған көндәрҙә ҡатнашыусылар ике төркөмгә бүленә: тәүгеһе тәүлегенә - 5, икенсеһе 9 сәғәт йоҡлай. Ике төркөмгә лә аҙыҡтүлеккә сикләү ҡуйылмай. Биш көндән һуң асыҡланыуынса, 5 сәғәт йоҡлаусылар энергияны 5 процентҡа күберәк тотона, әммә калорияны ла 6 процентҡа күберәк йыя. Бынан тыш, улар иртән аҙ, кисен күберәк ашай. Билдәле булыуынса, тап киске ашты мул ашау артыҡ ауырлыҡҡа килтерә лә.

■ Алтындан яһалған биҙәүестәр тирегә ышҡылып, нервылар системаһының эшенә кире йоғонто яһай. Канада ғалимдары асыҡлауынса, алтын алҡа-беләҙектәр хис-тойғоға бирелеп барыусы кешеләрҙә ауыр депрессия хәләнә индереүе ихтимал. Билдәләнеүенсә, ҡиммәтле металл тирегә тәьҫир итеп, нервылар системаһын ҡуҙғытыу хәленә килтерә. Бынан тыш, ул матдәләр алышыныу процесын әкренәйтә, кешелә хәүеф тойғоһо көсәйә, ә психикаһы тотороҡло булмаған кешеләрҙә депрессияға килтерә. Белгестәр биҙәнеү әйберҙәренән бөтөнләй баш тартырға ҡушмай, шулай ҙа уларҙы төнгөлөккә сисеп торорға кәңәш итә. Шулай уҡ алтынды көмөш биҙәүестәргә алыштырыу тағы ла яҡшыраҡ, ти тикшеренеүселәр. Көмөш нервылар системаһына бик һыңай тәьҫир итә, артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтеү көсөнә лә эйә.

■ Сингапур милли университеты һәм Гонконг университетының бер төркөм ғалимдары гел ауыр сумка һөйрәп йөрөүҙең кеше психикаһына тәьҫирен асыҡлаған. Һөҙөмтәлә, артыҡ ауырлыҡтың депрессияға килтереүе билдәләнгән, йәғни белгестәр сумкаһың ауырлығы һәм уның хужаһының күңел торошо араһында бәйләнеш барлығын раҫлай алған. Эксперимент барышында психологтар ҡатнашыусыларға билдәле бер ваҡыт эсендә ауыр сумка тотоп йөрөргә ҡушҡан. Унан һуң улар менән был мәсьәләгә ҡағылышлы булмаған темаларҙа һөйләшкәндәр. Бар ҡатнашыусыларҙың да фекерләүе кире яҡҡа үҙгәргән. Икенсе төрлө әйткәндә, кеһ һайын ауыр сумка һөйрәп йөрөүселәрҙә ҡараңғы уйҙар йышыраҡ барлыҡҡа килгән. Тик был проблемаға икенсе төрлө ҡарарға мөмкин, ти белгестәр: проблема үҙе түгел, ә беҙҙең уға ҡарашыбыҙ күпкә мөһимерәк. Әгәр ҙә ауыр сумка тотоп китеп барған кеше уға ауыр йөк итеп ҡарамай, күңелләрәк уйҙар уйлап йөрөһә, уның психикаһында кире яҡҡа үҙгәрештәр булмаясаҡ.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ЯУГИР ӨСӨН ИҢ ҘУР БҮЛӘК - ТЫНЫСЛЫҠ!

**Украиналағы Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яҡташ яугирҙар менән аралашырға форсат тейеп тора. Был юлы Өфө ҡалаһынан "Башҡортостан" полкында танк батальонында взвод командиры булып хеҙмәт иткән "Счастливчик" ҡушаматлы Вәсил Рәис улы АСЛАЕВ менән тыныс тормош ҡәҙере, ир-егет бурысы тураһында әңгәмәләштек. Ул - Суворов һәм Шайморатов, "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыға" миҙалдарына эйә яугир.**



➔ **Тәү сиратта үҙегеҙ менән танышытырып, яугир юлына нисек аяҡ баҫырға ҡарар итеүегеҙ тураһында һөйләп китһәгеҙ ине.**

- Мин ябай бер кеше, ғаиләм бар, яҡшы эшем бар ине. Әммә егеттәрҙең ил һаҡларға китеүен күреп, балаларыбыҙ тыныс тормошта йәшәһен, тигән теләк менән Махсус хәрби операцияға юлланырға булдым. Быға тиклем Себерҙә "Сургутнефтегаз"да эске яныулы двигатель машинисы булып эшләнем, тотороҡло эш урыным, юғары эш хаҡым, ваҡытында тәғәйен ял көндәрем дә бар ине.

Шулай ҙа былтыр май айында үҙем өсөн бик мөһим ҡарар ҡабул иттем, башта ғаиләмә лә, яҡындарға ла әйтмәнем. Мобилизация ваҡытында уҡ хәрби комиссариатҡа барырға ниәтем бар ине, әммә ул ваҡытта ялым тамамланған мәлгә тура килде лә, эшкә киттем. Сираттағы ялға ҡайтҡанымда, республиканың үҙ полкы төҙәлә, тигән яңылыҡты ишеттем һәм икеләнмәйсә хәрби комиссариатҡа барҙым. Ике көн эсендә кәрәкле барлыҡ ҡағыҙҙарҙы туплап бөткәйнем инде. Яҡындарыма был ҡарарым тураһында башта өндәшмәгәйнем, тик ҡыҙым телефондан һөйләшкәнемде ишетеп ҡалып, әсәһенә: "Атай һуғышҡа китәме ни?" - тип борсолоп әйткән. Шулай итеп ҡатыным, улым да белеп ҡалды, ә башҡаларға өндәшмәнек.

➔ **Ҡайһы берәүҙәр, Махсус хәрби операцияға оҙон аҡса артынан юлланалар, тип фекер йөрөтә...**

- Был минең осраҡта хаҡлыҡҡа тап килмәй. Мин балаларымдың киләсәген уйлап юлландым: армияға барам тип торған 19 йәшлек улым тыныс тормошта хеҙмәт итһен, буй еткереп килгән ҡыҙым ыҙалыҡтар кисермәһен, тинем. Бына шул мөһим ине, ә аҡсаны мин былай ҙа яҡшы таба инем. Шуға ошондай ҡарар ҡабул итеүемә үкенмәйем, хәҙер уҡып, офицер званиеһы алдым. Комбат, штаб начальнигы, замполитыбыҙ ҙа яҡшы кешеләр, егеттәргә һәр яҡлап ярҙам итеп торалар, кәрәкле документтарҙы ла ваҡытында юллашалар хатта.

➔ **Элек ололарҙың "Һуғыш ҡына булмаһын", тигән теләген ишетеп үҫтек, әммә был михнәттәрҙе һөйләгәндәрҙән генә, хатта әкиәт һымаҡ ҡына итеп белә инек. Үҙ иңегеҙҙә татығас, тормошҡа ҡарашығыҙ үҙгәрҙеме?**

- Әлбиттә, үҙгәрә, сөнки ваҡыт һәм ғүмерҙең ҡәҙере икенсе төрлө баһалана башлай. Егеттәр менән тегендә ҡыҫҡа ғына ял минуттарында һөйләшеп ултырғанда ла, бында ялға ҡайтҡанда күрешкәндә лә күптәр: "Быға тиклем мин улай булмай торғайным", - тиҙәр. Күптәр тормоштарын баһалап ҡарайҙар, кемдәрҙер дөрөҫ эшләгән-эшләмәгән хәлдәрен иҫкә төшөрә, тегеләй йәки былай итергә кәрәк булған, тип тә уйлайҙар. Сөнки билдәһеҙ, бөгөн барһың, иртәгә - юҡ. Ҡараштар үҙгәрә, отпускыға ҡайтҡанда нимәләр эшләйәсәктәре тураһында ла етдиерәк уйланалар. Хеҙмәткә яңы ғына килгән егеттәргә ҡарап та ошо үҙгәреште тойорға була: улар башта һауалыраҡ була, күптәре хатта еңел холоҡло һымаҡ күренә, кемеһелер "Иртәгә эшләрбеҙ" тип тә уйлай. Әммә тәжрибәле яугирҙар менән ундайҙарҙың бер-ике айҙан бөтөнләй башҡаса фекер йөрөтә башлаясаҡтарын анлап, йылмайышып ҡына ҡуябыҙ.

Бөгөнгө эште иртәгәгә һис ҡалдырырға ярамай, ошо хәҡиҡәтте яҡшы төшөндәрә яу яланы. Хатта ябай ғына шул окоп ҡаҙыу эшен дә "Әйҙә, бөгөн ҡаҙымай торайыҡ", тип тәҡдим итеүселәр ҙә юҡ түгел. Ә бында ул иртәгә кәрәк булмауы ла ихтимал, ул һинә ярҙам итмәйәсәк. Отпускыға ҡайтҡаныбыҙҙа һирәкләп булһа ла йәше тулып, хәрби хеҙмәттән азат ителгән өлкәнерәк яуҙаштар менән күрешеп торабыҙ, улар ҙа тыныс тормошҡа 3 ай тирәһе өйрәнә алмай, аптырап йөрөнөк, тиҙәр. Беҙ инде 20 генә көнлөк ялда быға иғтибар биреп етмәйбеҙ, ә шулай ҙа ҡайһы берәүҙәрҙән: "Барып аҡса эшләп ҡайттың инде", - тиеберәк үҫеп ҡарауҙары, һораҙары сәйер тойола. Улар унда һине ҡалас көтөп торманғанын күҙ алдына ла килтермәйҙәр, күрәһең.

➔ **Тылдан гуманитар ярҙам ебәреп торалар, халыҡ маскировка селтәрҙәре лә, фольгалы одеялдар ҙа, ризыҡтар ҙа әҙерләй, был ярҙамды тояһығыҙмы?**

- Гуманитар конвойҙар килеп тора, бик ярҙам итә был беҙгә. Үҙем танк командиры булғас, нәҡ шул халыҡ үргән маскселткалар бик кәрәкле беҙгә. Республика етәкселегенән дә, район хакимиәттәренән дә ярҙам килә, үҙебеҙҙе иғтибарһыҙ итеп тоймайбыҙ, шөкөр. Алдан мин тоҫҡаусы булып хеҙмәт иткәндә танкыбыҙ командиры хеҙмәттән азат ителеп ҡайтҡайны, ул да даими рәүештә хәлебеҙҙе белешеп тора, нимә кәрәк - барыһын да ебәрергә әҙерҙәр. Бензин бысҡыһы, генератор, масксеткалар, башҡа ваҡтөйәк кәрәк-ярақты ла машиналар менән юллайҙар ҙа ҡуялар.

Балаларҙан, мәктәп уҡыусыларынан иһә, күңелдәрҙе иретерлек, көсҡеүәт өҫтәрлек хаттар алабыҙ - был да беҙҙең өсөн бик мөһим. Улар иҫәнһау әйләнеп ҡайтығыҙ, бирешмәгеҙ, беҙ һеҙҙе көтәбеҙ, тигән сәләмдәрен юллай, танкист булғас, танк һүрәте төшөрөп ебәрәләр, ҡыҙҙар сәскәләр, гөлләмәләр төшөрә. Хаттарҙы уҡып, блиндаждарҙа элеп ҡуябыҙ, ҡайһы саҡта хатығыҙҙы алдыҡ, тип яуапҡа видео төшөрөп тә ебәрәбеҙ. Ошо балалар аяҙ күк аҫтында йәшәһен, киләсәктәре яҡты булһын тип көрәшәбеҙ бит.

➔ **Тыуған яҡты иҫкә төшөрөп, тыныс тормош яулангас, нимә эшләйәсәгегеҙ тураһында хыялдарға урын бармы?**

- Бар, әлбиттә, әммә ваҡыт тар. Күмәкләшеп йыйылышып ултырған минуттарыбыҙ бик һирәк. Теге Бөйөк

Ватан һуғышы тураһындағы фильмдарҙа күрһәтелгән кеүек, төндәрен усаҡ яғып, йырлашып, һөйләшеп ултырып булмай. Ғөмүмән, усаҡ яҡмаҫҡа тырышабыҙ. Бушыраҡ минуттарҙа, ашаған саҡтамы, әҙерәк бер урында йыйылырға тура килгәндә хәл-әхүәлдәребеҙҙе һөйләшеп, был мәлдә ауылда, өйҙә булһаҡ, нимә эшләр инек, тип хыялланышып алабыҙ инде. Барыбыҙ ҙа тиҙерәк тыныс тормошто яҡынайтырға теләйбеҙ. Арабыҙҙа 20-30 йәшлек егеттәр бар, уларға ла гел, үҙегеҙҙе һаҡлап йөрөгөҙ, тыуған яҡҡа ҡайтаһы, балалар үҫтерәһе бар әле һеҙгә, тип әйтеп торам. Шулай ҙа йәшерәктәрҙе Махсус хәрби операция туҡтатылыу менән ундағы тормош тынысланмайынса ҡайтарып та ебәрә алмаҫтар әле. Бигерәк тә минең кеүек хәрби званиеһы булған кешеләрҙе. Шуға артабан да хеҙмәтте дауам итеү ихтималлығын ҡаҡында ла уйланырға тура килә. Ә бында тыныс тормошҡа өйрәнеп китеүе ифрат еңел...

➔ **Офицерҙар талап итеlә, тип тә әйткәйнегеҙ. Хәрби званиелы кешеләрҙең етешмәүе нимәгә бәйле булыуы ихтимал?**

- Аныҡ ҡына яуап бирә алмайым был һорауға, сөнки үҙем дә хәрби училищела белем алманым, тик бында ғына уҡыттылар бит. Шулай ҙа махсус белемле иптәштәр менән аралашып торабыҙ, өлкәнерәк йәштәгеләр һөйләүенсә, элек былдай училищеларҙы йылына 3-әр мең кеше тамамлаһа, хәҙер 1 мең тирәһе генә сығарылыш студенты иҫәпләнә икән. Етмәһә, улар араһынан күбеһе хәрби һөнәр үҙләштерһә лә, был өлкәлә эшләмәгән. Быйын сәбәбе ниҙә икәнен әйтә алмайым, бәлки, бала саҡтан патриотик тәрбиә биреү аҡһауына ла бәйләләр.

➔ **Йәштәргә, айырыуса ир балаларға, ниндәй тәрбиә бирергә кәрәк?**

- Иң мөһиме, алдамаҫҡа өйрәтергә кәрәк. Мин улыма ла шулай тәрбиә бирҙем, хәҙер ҡыҙыма ла шуны әйтеп кенә торам. Алдыҡтың осо була, бер алдарһың, бәлки, әммә икенсе, өсөнсөһөнә ул асыҡланыр. Шулай ҙа бөгөн заманалар башҡа, йәштәрҙең уҡыуы ла, эше лә, эш хаҡы ла телефон һәм компьютерҙарында. Быларҙан уларҙы айырып та булмай, шулай ҙа физик яҡтан сыныҡыуҙарға ла иғтибар бүлергә онотмаһындар, тип әйткем килә. Беҙ үҫкән саҡта былдай мөмкинлектәр булманы, ә хәҙер йәнең теләгән секцияға яҙылырға була: йүгереү, ауыр атлетика, каратэ, самбо, йөҙөү һ.б. Бына шул бирелгән мөмкинлектәрҙе ҡулдан ысҡындырмаһындар, ваҡыттарын файҙалы үткәрһендәр.

➔ **Беҙҙең герой яугир Фәнис Хөсәйеновтың дошман танкыһын урлап ҡасыуын халыҡ белә, һеҙҙең взводта шундай батырлыҡтарға урын бармы?**

- Ундай оло батырлыҡтар эшләгәнебеҙ әлегә юҡ, әммә алғы һыҙыҡта көн дә ниндәйҙер хәлваҡиғалар булып тора, иптәштәребеҙҙе һәм үҙебеҙҙең ғүмерҙәрҙе һаҡлағанда, алдыбыҙҙа ҡуйылған бурыстарҙы үтәгәндә батырлыҡтарға урын бар, тип уйлайым. Бына яңыраҡ ҡына алғы һыҙыҡҡа сығып, тура төҙәп атҡанда дошмандарҙың дрондары һөжүм итеп, "Робин" ҡушаматлы яугирыбыҙҙың люгына снаряд ташланылар, әммә ул иҫән юғалтырҙан алда бөтә экипажды хәүефһеҙерәк урынға алып сығып өлгөрҙө. Ҡыҙғанысҡа күрә, үҙе бер ҡулһыҙ ҡалды. Һәр кемебеҙ шулай үҙ бурысыбыҙҙы үтәргә тырышабыҙ. Минең дә наградалар алғы һыҙыҡҡа сығып эшләгән өсөн, сәптәрҙе уңышлы ғына юҡ иткән өсөн бирелгән. Шулай ҙа беҙҙең өсөн иң юғары награда - тыныслыҡ.

➔ **Исеменә күрә - есеме, тиҙәр. Һеҙҙең ҡушаматығыҙ бик матур, йогонто яһаймы?**

- "Счастливчик" позывнойын мин МХО-ға юлланырға һанаулы ғына көндәр ҡалғанда ғаилә менән бергә сәй эсеп ултырған мәлдә уйлап таптыҡ. Тәүҙә ҡатыным әйткәйне, ҡыҙым да хупланы: "Атай, һинә ошо ҡушаматты бирәм", - тине. Улар үҙҙәренсә шул ҡушамат миңә ярҙам итер, тигәндәрҙер инде. Әммә ысынбарлыҡта был ҡушамат ярҙам итәме-юҡмы - ул хаҡта уйланып торорға ваҡыт булғаны юҡ. Иң мөһиме, һаҡланғанды - һаҡлармын тигән Хоҙай. Егеттәргә лә киҫәтеп кенә торам: һәр аҙымды үлсәп баҫырға, алдыңды-артыңды ҡарап, абайлап йөрөргә кәрәк. Ерҙе ҡарарға, башты күтәреп һауаны ҡарарға - ҡурҡыныс аҙым һайын һағалап тора. Беҙ ҡушаматтың көсөнә бик иғтибар итмәһәк тә, Хоҙайға ышанысыбыҙ ҙур. Хатта танк менән ҡуҙғалырға булғанда ла "Бисмилләһир-рахмәнир-рахим", тип, эске бәйләнеш буйынса ҡысҡырып әйтеп, ҡуҙғалып китә егеттәр. Ул саҡта эстән генә сүрәләр уҡып, теләк теләп ҡалаһың. Яҡташтар менән бер урында булғас, башҡортсалап хәл-әхүәлдәрҙе һөйләшеп алыуы ла күңелдәрҙе асып ебәрә ул.

➔ **Тылдағыларға әйтергә теләгән һүҙҙәрегеҙ ниндәй булыр?**

- Уларға тиҙерәк тыныслыҡ алып ҡайтырға тырышырбыҙ. Беҙ яуҙа йөрөгәнгә бындағылар ҙа борсола бит ул, йөрәктәре түҙмәй. Ауылдарҙан күпме гуманитар ярҙам ебәрәләр, бығтырылған итен дә әҙерләйҙәр, һалма ла ҡырҡалар, масксетка ла үрәләр, ойоҡ та бәйләйҙәр, тимәк, улар ҙа йоҡламай. Махсус хәрби операция тамамланһа, исмаһам, тылдағылар ҙа тыныс булыр ине. Барыбыҙ исеменән дә рәхмәт һүҙҙәрен юллайым һәм һаулыҡ-сәләмәтлек, сабырлыҡ, түҙемлек теләйем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Тамырҙары менән Ейәнсура районы Юлдаш ауылынан булған геройыбыҙ үҙе армияла диңгеҙ буйы һағында хеҙмәт итһә лә, танк ғәскәрҙәренә эләгеүен, яҙмыштыр, ти. Сөнки атаһы танкист булған. Ата юлын ул ҡыуыр, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр шул боронғолар. Бына шундай намыҫлы ир-егеттәребеҙ булғанда, илебеҙҙе һаҡлар, киләсәгебеҙҙең тыныслығын тәьмин итер быуындар булыр әле.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Егерме беренсе хат: "Нисек яҙырға?"

Художестволы ижадтың шаяртыу тигән төрө тураһында ла шулай тип әйтергә мөмкин. Шаяртыу, мәҫәлән, бәхәсләшкәндә бик кәрәкле. Аудиторияны көлөргә мәжбүр итеү - уларҙы үҙеңдең хаҡлығыңа яртылаш инандырыу тигән һүҙ. Художестволы образ һәм шаяртыу уҡыусының йәки тыңлаусының авторҙың фекерен уртаҡлашырға күндерә.

Француз әйтеме былай ти: "Көлөүселәрҙе үҙ яғыңда тотоу мөһим". Кем менән бергә көләләр - шул бәхәстә еңеүсе.

Шаяртыу ауыр хәлдәрҙә мөһим: ул күңел тыныслығын ҡайтара. Суворов шаяртыуҙар менән һалдаттарын дәртләндергән.

Шуға логик яҡтан ғына түгел, ә эмоциональ ышандырыу ҙа кәрәк булған осраҡта художестволы образ һәм шаяртыу бик мөһим. Улар фәнни-популяр хеҙмәттә лә, оратор сығыштарында ла әһәмиәтле. Һәр лектор аудиторияның ҡыҙыҡһыныуы һүрелгәндә шаяртыу ярҙамында уны тергеҙеп алыу ни тиклем мөһим булыуын белә. Шаяртыу хатта художестволы образға ҡарағанда ла әүҙемерәк йәлеп итеlеүҙе талап итә, ул тик кенә тыңлап ултырыуҙан тыш, мәрәкәне "уйлап бөтөрөп" ҡуйырға ла этәрә.

Әммә ғилми хеҙмәттә образлылыҡ һәм тапҡыр һүҙҙәр тик ниндәйҙер бер дивертисмент булараҡ ҡына рөхсәт итеlә. Ғилми тел художестволы әҙәбиәт теленән тәбиғәте менән айырыла. Ул әйтелгәндәрҙең аныҡлығын, максималь ҡыҫҡалығын, теүәл логикалы булыуын талап итә, теләнә ниндәй "уйлап бөтөрөүҙәрҙе" инҡар итә.

Ғилми телдә яҙма телмәргә хас әйтелештәр һиҙелмәһен: ул енел булырға тейеш. Ғилми хеҙмәттең теле һиҙелмәҫкә тейеш. Әгәр уҡыусы ғилми хеҙмәтте уҡып, унын яҡшы йәки насар яҙылғанлығына иғтибар итмәһә, тимәк, ул яҡшы яҙылған. Яҡшы тегенсе костюмды беҙ уны "һиҙмәйенсә" кейеп йөрөрлөк итеп тегә. Ғилми яҙып биреүҙең иң яҡшы ягы (мин бында дөйөм мәғәнәлә алам, ә тел тураһында ғына түгел) - логикалы булыу һәм бер фекерҙән икенсеһенә сиратлап күсеш. Фекерҙе үҫтерә белеү - ул логикалы булыу ғына түгел, ә аңлайышлы яҙыу ҙа.

Ғалимдың үҙенең хеҙмәтен уҡыған кешеләрҙе "тойоуы" мөһим, ул кемгә мөрәжәғәт итеүен аныҡ белһен.

Яҙыласаҡ хеҙмәтендә уҡыясаҡ кешене һәр ваҡыт күҙ алдына килтерергә һәм уның менән әңгәмәләшкән кеүегерәк итеп хис итергә кәрәк үҙендә. Был уйҙырма уҡыусы шиксел, бәхәсләшергә әҙер торған, тиҙ генә ышанып бармаусан кеше булһын, әйҙә. Теүәл ғилми хеҙмәтте уҡыусының былдай уйҙағы образы юғары булырға тейеш - ул һүҙ барған өлкәлә белгес булһын. Ғилми-популяр хеҙмәттәрҙе уҡыясаҡ кешене бер аҙ аңһыҙ итеп күҙ алдына баҫтырыу кәрәк (сама белеү мөһим: уҡыусыңды рәнйетергә ярамай). Был күҙ алдына килтергән уҡыусы менән һөйләшеп, уға һөйләгәндәрҙең барыһын да яҙып алығыҙ. Яҙма телегеҙ һөйләү теленә яҡынараҡ булған һайын, ул яҡшыраҡ, иркенерәк, тәрләрәк, интонацияһы буйынса тәбиғирәк. Яҙма телмәргә хас үҙенсәлекле әйтелештәр телде ҡатмарландыра. Улар кәрәкмәй. Әммә һөйләү теленең ҙур етешһеҙлектәре лә бар: ул һәр ваҡыт аныҡ, ыҡсым түгел, ҡабатлауҙар күп. Тимәк, күҙ алдына баҫтырған уҡыусыға үҙеңдең әйтергә теләгәндәреңде яҙғандан һуң тексты мөмкин тиклем ҡыҫҡартырға, төҙәтергә, аныҡ булмаған, сикһеҙ, "һөйләү" һүҙҙәренән арындырырға кәрәк. Ғилми хеҙмәт "һығыла", йыйнаҡ, аныҡҡа әүерелә, әммә йөнле телмәр интонацияһын һаҡлап ҡаласаҡ, ә иң мөһиме - унда адресат, автор күҙ алдына килтергән әңгәмәсе һиҙеләсәк.

Яҙма телде йыш ҡына һөйләү теле байыта һәм еңеләштерә килә. Һөйләү теленән айырым һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштерергә мөмкин. Ләкин һөйләү һүҙҙәре стилистик йәһәттән шул ҡәҙәре көслө һәм яҙма телдә һиҙелеп торалар, шуға ла уларҙы йыш ҡабатларға ярамай.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# КӨНДӘЛЕК ДОҒАЛАР ҺӘМ ЗЕКЕРҘӘР



## БУРЫСТАРҘАН ҠОТОЛОУ ӨСӨН УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

**Аллааһүммәкфинии бихәләәликә ғән хәраамикә үә ағнинии бифадликә ғәммән сиүәәк.**

"Эй Аллам, Һинең тарафтан рөхсәт ителгәндең етешлеге мине Һинең тарафтан тыйылғандан йыраҡлаштырһа ине һәм Үҙеңдең шәфҡәтлелегең менән Һинән башҡа кемгәләр көнөм төшөүҙән араласы" *(Тирмизи. "Доға", 110-сы бит).*

Бурыстары булған кеше иртәнге намаҙҙан һуң "Әл-Әғрәф" сүрәһенең 89-сы аятын доға итеп өс йөҙ тапҡыр ҡабатлаһын:

**Раббәнәфтәх бәйнәнәә үә бәйнә ҡауминәә билхәҡҡи үә әнтә хәйрул-фәәтихиин.**

Ә һәр йәҙәнсәһенән һуң:

**"Аллааһүммә йәә мүфәттихәл-әб'үәәбифтәх ләнәә хәйрал-бәәб"** тип әйтһен. Ул сағында Аллаһ уға Үҙенең шәфҡәтлелеге менән ярҙам итер.

## ҮЛЕМ ХӘБӘРЕН АЛҒАНДА УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

**Иннәә лилләәһи үә иннәә иләйһи раажиғүүн.**

"Хаҡиҡи, беҙ - Аллаһтыҡы, һәм беҙ - Уға ҡайтыусылар" *("Әл-Бәҡара" сүрәһе, 156-сы аят).*

## КҮК КҮКРӘГӘНДӘ УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

**Аллааһүммә ләә тәктүлнәә бигадабикә үә ләә түһликнәә биғәҙәәбикә үә ғәәфинәә ҡабләә ҙәәлик.**

"Эй Аллам! Беҙҙе Үҙеңдең нәфрәтең менән үлтермә, ыҙа сиктермә һәм был хәлдән (күк күкрәүҙән) алдараҡ бәрәкәтле һаулыҡ ебәрсе".

## КҮҘ ТЕЙЕҮҘӘН ҺАҠЛАНЫУ ӨСӨН УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

"Көрьәндә күҙ тейеүҙән һаҡлай торған һигеҙ аят бар: әтәүһе "Әл-Фатиха" сүрәһенең аяттары, ә һигеҙенсеһе - "Аят әл-Көрси". Уларҙы уҡыған кешегә ул көндә кешеләрҙең дә, ендәрҙең дә күҙе теймәйәсәк".

ТУҒАН ТЫЛ

# УНДА ЛА ҠАТЫН-ҠЫҘ ЯРҘАМЫ КӘРӘК



**Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, билдәле тележурналист Рәмзиә Кәримова беренсе ҡатын-ҡыҙҙар отряды ирекмәндәре сафына баҫты һәм МХО биләмәһендәге хәрби госпиталгә эшкә юлланды. Алдағы бер нисә аҙнала ул медиктарға ауырыу һәм яралы һалдаттарҙы ҡарарға ярҙам итәсәк.**

- Коллегабыҙҙың ниәте менән ғорурланабыҙ. Республикала беренсе ҡатын-ҡыҙҙар отряды барлыҡҡа килеү менән уҡ ул шунда уҡ исемлеккә яҙылды. Ул беренсе төркөмгә инмәне һәм хәҙер ялға ҡайтҡан ирекмәндәрҙе алмаштырыу ваҡыты еткәс, МХО зонаһына юллана. Шуны билдәләп үткем килә, был эш түләүле түгел, депутат йөрәк ҡушыуы буйынса бара, шәхси ваҡытын, аҡсаһын сарыф итә, ҡулынан килгәнсә ярҙам итә. Медицина хеҙмәткәрҙәре менән бер рәттән, улар һәр төрлө ярҙам күрһәтәсәк, яралы һалдаттарға яҡын туғандарын алмаштырасаҡ, - тине БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев.

- Әгәр ҙә беҙ Башҡортостан юлдаш телеканалының "Яңылыҡтар" тапшырыуҙарында Ватанға тоғролоҡ, илһөйәрлек тураһында һөйләйбеҙ икән, үҙебеҙҙән башларға тейешбеҙ. Икенсенән, мин тыуған илемә сикһеҙ рәхмәтлемен. Тыуып-үҫкән төйәгемдән, килен булып төшкән еремдән, иремдән, балаларымдан, эш урынымдан, дуҫтарымдан, ғөмүмән, тормош юлымда осраған кешеләрҙән ундым. Бушлай ике юғары белем алдым, социаль торлаҡ программаларында ҡатнаштыҡ, балаларыбыҙ дәүләт медицина учреждениеларында донъяға килде, Әсәлек капиталы бирҙеләр, балаларға пособиелар түләнеләр, ҡыҙым әле Һамар медицина университетында бюджет нигеҙендә белем ала. Республикам, халҡым мине шәхес ҡимәлендә күтәрҙе. Оло ышаныс күрһәтеп, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутат итеп һайланылар, Башҡортостан тележурналистары араһында иң беренсе "Рәсәйҙең атҡаҙанған журналисы" тигән абруйлы исемгә лайыҡ булдым. Шуға күрә хәҙер Ватаныбыҙ именлегенә хәүеф янағанда иңебеҙҙе ҡуйыр, һүҙ менән генә түгел, аныҡ эштәр менән яуап бирер ваҡыт етте, тип иҫәпләйем. Мөхәббәт бит ике яҡлы булырға тейеш. Минен, ябай журналист булараҡ, аҡсалата ярҙам күрһәтерлек мөмкинлегем юҡ, әммә ысын йөрәктән ҡул көсөм, күңел йылыһы менән бүлешә алам, - тине Рәмзиә Кәримова.

Быға тиклем тәүге ҡатын-ҡыҙҙар отряды ирекмәндәренең МХО зонаһынан Башҡортостанға ҡайтыуы тураһында хәбәр ителгәйне.

***Әйткәндәй, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы алып барыусыһы Эльмира Юлдашева МХО-ға барырға ҡарар иткән. Актриса махсус операция бурыстарын алғы һыҙыҡта үтәргә ниәтләй, шуға күрә бөгөн БПЛА операторына уҡый.*** "Мин - Тыуған илемдең патриоты. Ватаныбыҙҙы һаҡларға кәрәклегенә һаман да шикләнгән ир-егеттәргә өлгө булғым килә. Коллегаларым минең ҡарарымды бик хупланы. Мәҙәниәт министрлығы етәкселеге минең эш урынымды һаҡлап ҡаласаҡ", - тине Эльмира. Ул үҙенең ниәте ныҡлы булыуын, әммә барыбер бер аҙ борсолоуы хаҡында һөйләне. "Әлбиттә, мин борсолам. Әммә көслө кешемен, тормошта күпте күрҙем. Барыһы ла килеп сығыр тип уйлайым. Яҡындарыма терәк-таяныс булыуҙары өсөн рәхмәтлемен", - тине актриса.

Эльмира Юлдашева республикала "Ай ҡыҙы" башҡорт телесериалында (режиссеры Әнүәр Нурмөхәмәтов) төп ролде башҡарыусы актриса булараҡ билдәле, шулай уҡ ул - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы.

АФАРИН!

# ХӘҮЕФҺЕҘЛЕКТЕ ХӘСТӘРЛӘП...



**Өфө ҡалаһының Совет районында урынлашҡан 249-сы Башҡорт балалар баҡсаһы 1973 йылда асыла һәм матур, итәғәтле балалар тәрбиәләү эшенә тотона. Туған телгә һөйөү, башҡорт мәҙәниәтенә тәрән хөрмәт менән ҡарарға өйрәтеү - был балалар баҡсаһының төп йүнәлештәренең береһе.**

Бөгөн баҡсаға 74 бала йөрөй, ике төрлө йәштәге төркөм эшләй. Үҙ эшенә мөкиббән киткән, балаларҙы бик яратҡан татыу, тырыш тәрбиәселәр эшләй. Уларҙан тыш, был уңған коллективта психолог, методист, музыка белгестәре, медицина хеҙмәткәрҙәре лә бар. Тәрбиәселәр, музыка уҡытыусылары балаларға бар күңел йылыһын биреп эшләп кенә ҡалмай, төрлө конкурс-фестивалдәрҙә лә әүҙем ҡатнаша. Бөтәһенең дә конкурс йәки фестиваль еңеүсеһе тигән танытмалары бар. Балаларҙы ла ҡала күләмендә уҙғарылған "Һаумы, һаумы, әкиәт", "Баш ҡала йондоҙҙары", "Илһам" кеүек конкурстар, фестивалдәргә ентекле әҙерләйҙәр. Уларҙа ҡатнашҡан балалар һәр ваҡыт призлы урын яулауға өлгәшә. Балалар менән осрашыуҙарға билдәле яҙыусылар, сәнғәт әһелдәре, матбуғат хеҙмәткәрҙәре йәлеп ителә.

Бына шулай күңелле йәшәй был баҡсаға йөрөгән балалар. Ата-әсәләр ҙә баҡсанан бик ҡәнәғәт, тәрбиәселәрҙең һәр бер башланғысын хуплап, күтәрмәләп алалар, ихлас ярҙам итәләр. Мәҫәлән, күптән түгел бында "Урындағы башланғыстарҙы хуплау (ППМИ)" программаһында ҡатнашыу өсөн проект һайлау буйынса йыйылыш үткәрелде. Йыйылыш барышында балалар баҡсаһы мөдире вазифаһын башҡарыусы Шәһәрова Лиана Шәфҡәт ҡыҙы киләһе 2025 йылда ошо программала ҡатнашыу теләген белдерҙе һәм бөгөн балалар баҡсаһының хоҡмаһын төҙәкләндереү көнүҙәк мәсьәлә булыуын әйтте. Балалар баҡсаһына балаларын йөрөткән ата-әсәләрҙән һәм яҡын тирәләге йорттарҙа йәшәүселәрҙән торған инициатив төркөм балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүселәрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин итер был проектты хупланы, уны тормошҡа ашырырға ярҙам итергә теләк белдерҙе.

**Рәйсә АБДРАХМАНОВА.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3 декабрь "Заятүләк менән Һыуһылыу"** (М. Ғафури, М. Малухина), башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 6+
**4 декабрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**6 декабрь Премьера! "Ах, был мөхәббәт!"** (А. Чехов водевилдәре буйынса). 12+
**7 декабрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 18.00 12+
**8 декабрь "Балам"** (В. Емелева), спектакль-терапия. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**3 декабрь Премьера! "Ҡара һыуҙар"** (М. Кәрим), өн аралаш төш. 12+
**4 декабрь "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айтматов), хикмәт. 12.00 12+
**"Мөхәббәт хаҡы"** (В. Афонин), бер мөхәббәт тарихы. 12+
**5 декабрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 11.00 0+
**8 декабрь "Кем һин, Венер Камалов?"** ижад кисәһе. 18.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**4 декабрь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 18.00 0+
**5, 7, 8 декабрь "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова). 18.00 0+
**6 декабрь "Щелкунчик"** (Ю. Ким). 18.00 0+
**7 декабрь "Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 0+
**8 декабрь "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**3 декабрь "Классик сәхнә йондоҙҙары"** концерт. 6+
**4-5 декабрь "Ел тыуҙырған моң"** халыҡ-ара этник фестиваль концерты. 6+
**6 декабрь** Евгений Михайлов, фортепиано. 6+
**7 декабрь "Музыку слушаем вместе"**, Орган залы әкиәттәре. 11.00 0+
**"Музыкаль интерактив"**, 4-7 йәшлектәр өсөн Орган азбукаһы. 13.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**2 декабрь "Ғүмерҙәрҙең бер мәле"** (Н. Мусин, З. Бураҡаева инсц.), фантастик төш. 16+
**4 декабрь "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (Х. Латипова, С. Латипов), музыкаль комедия. 12+
**6 декабрь "Һырғалаҡ"** (А. Житковский), балалар баҡсаһы хроникалары. 12+
**7 декабрь "Легенда о воине Дракона"** (Р. Ғәйнуллин), әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**4 декабрь "Фронтовичка"** (А. Батурина), драма. 12+
**5 декабрь Премьера! "Вариҫ"** (В. Жеребцов), драма. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**5 декабрь "Дайте в руки мне баян"**, И. Замановтың концерты. 6+
**7 декабрь Премьера! "Дала буйлап икәү бара"** (Э. Йәнһүҙин), музыкаль комедия. 18.00 12+
**8 декабрь "Сказка о купце и работнике его Балде"** (А. Пушкин, В. Жуковский), әкиәт. 12.00 0+
**Премьера! "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В. Гуркин), комедия. 18.00 12+

## БР Милли музейы

**3 декабрь "Музей доступный для всех"** инвалидтар көнөнә. 11.00 6+
**4 декабрь "Мин тыуған еремдә осраҡлы ҡунаҡ түгел"** кинорежиссер Айнур Аҫҡаров менән осрашыу. 15.00 6+
**6 декабрь "Рәсәй тарихында немецтар"**, экскурсия. 15.00 12+
**7 декабрь "Йәш археолог курсы. Яңы миҙгел"**, сара. 14.00 6+
**"Ғаиләләр өсөн экскурсия"**. 15.00 0+
**"Яңы йыл уйынсығы"**, оҫталыҡ дәресе. 6+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# БӘЛӘКӘЙ ГЕНӘ АКТЕРЫБЫҘ



**Өфөнән 12 йәшлек актер Арыҫлан Ҡырымсурин "Ведьма" мистик сериалында төшкән, тиҙҙән уны ТВ3 телеканалында ҡарарға була. Проект өҫтөндә эш октябрь аҙағында тамамланған.**

Мистик мелодраманы төшөрөү урыны итеп Өфө һәм Таҫаҫты ауылы һайланған. Тамашасылар фильмда Башҡортостандың ғәжәйеп матурлығы менән һоҡланыуҙан тыш, урындағы фольклор легендалары менән таныша ала. Башҡорт ауылына килгән ғаилә тураһындағы мелодрамала үҫмерҙәр хаҡында ла сюжет бар. "Минең өсөн был - бишенсе проект. Күптән фантастикала төшөргә теләй инем, ниһайәт, республикабыҙҙа ошондай күп сериалы фильм төшөрҙөләр", - ти Арыҫлан.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, йәш актер Арыҫлан Ҡырымсурин башҡорт әҙәбиәте классигы Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесы буйынса төшөрөлгән "Һеңлекәш" фильмынан һуң тамашасыларҙың һөйөүен яулаһы. Ул төп герой Йәмил ролен оҫта итеп башҡарҙы. Һуңынан Арыҫландың Саида Медведеваның "Мостай", Булат Йосоповтың "Шағир көндәлеге", Айнур Асҡаровтың "Йыл ғаиләһе", Динара Әбдрәшитованың "Айназ" фильмдарында ролдәре булды. Бынан алдараҡ йәш яҡташыбыҙ Андреев исемендәге халыҡ-ара конкурс лауреаты исеменә лайыҡ булыуы хаҡында хәбәр ителгәйне.

# АУУУ, ҠУРАЙСЫЛАР КИЛӘ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың указы менән Башҡорт дәүләт филармонияһында ойошторолған Башҡортостан Республикаһының Дәүләт ҡурайсылар ансамбле республика буйлап гастролдәргә сыҡты.**

Дәүләт ҡурайсылар ансамбленең тәүге концерттары Асҡын ауылында, Благовещенда, Йомағужала , Стәрлетамаҡта, Талбазыла уҙҙы. Декабрҙә Салауатта, Мәләүеҙдә, Ишембайҙа һәм республиканың башҡа ҡалаларында концерттар планлаштырыла. Ә 2025 йылдың башында Силәбе өлкәһендә һәм Татарстанда ҙур гастролдәр көтөлә.

"Беренсе гастролдәр - бик яуаплы мәл, әлбиттә. Быға ныҡлап әҙерләндек, сөнки беҙгә мөһим бурыс йөкмәтелгән - киң ҡатлам тамашасыға мәҙәни-эстетик һәм илһөйәрлек тәрбиәһе биреү, милли мәҙәниәтте һаҡлау һәм башҡорт музыка символын данлау. Шуға күрә беҙҙең төп эшмәкәрлегебеҙ башҡорт музыка мәҙәниәтен популярлаштырыу өсөн Башҡортостан һәм Рәсәй төбәктәре буйлап гастролдәргә йөрөү менән бәйле. Артабан ансамблде халыҡ йырҙары менән байытырға һәм халыҡ бейеүҙәре менән биҙәргә уйлайбыҙ. Бынын өсөн коллективтың составын киңәйтәбеҙ", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты художество етәксеһе - Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, виртуоз ҡурайсы Азат Айытҡолов. Хәбәр ителеүенсә, 10 октябрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Дәүләт ҡурайсылар ансамбленең тәүге концерты ҙур уңыш менән үтте.

# ҠАҘАҠ ИЛЕН БАЙҠА!

**Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала "Ҡазағстан бөгөн" исемле фотокүргәҙмә асылды һәм "Ҡазаҡ халыҡ әкиәттәре башҡорт телендә" йыйынтығының исем туйы булды.**

Сара XX Ҡазағстан менән Рәсәйҙең төбәк-ара хеҙмәттәшлек форумы алдынан үткәрелде. Рәсми ҡунаҡтарҙан унда Ҡазағстандың Ҡазандағы Генераль консулы Ерлан Искаков һәм Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова ҡатнашты.

Фотокүргәҙмәлә Ҡазағстан үҙенсәлекле тәбиғәте, заманса ҡалалары, мәҙәниәте, халҡының ғөрөф-ғәҙәттәре яҙамында һынландырыла. Чарын каньоны аша осоп барған бөркөт, Әхмәт Йәсәүи кәшәнәһе ҡыйығында иртәнге ҡояш нурҙары, Или Алатауының мәғрур һырттары, далалағы ат уйындары - быларҙың барыһы ла фотограф Павел Теняковтың объективына теркәлгән. "Ҡазаҡ халыҡ әкиәттәре башҡорт телендә" китабы 2024 йылда Ҡазағстандың Ҡазандағы Генераль консулы һәм Ҡазағстандың Яр Саллылағы Почетлы консулы булышлығында Татар китап нәшриәтендә донъя күрҙе. Китап Милли китапхана фондында һаҡлана, уны теләгән һәр кем алып уҡырға мөмкин. "Ҡазағстан бөгөн" фотокүргәҙмәһе 6 декабргә тиклем эшләй. 6+

# ИХ, ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ҠЫҘҘАР!



**Традицион мәҙәниәт нигеҙендә сағыу музыкаль эксперименттары менән тамашасылар һәм тәнҡитселәр араһында танылыу яулаған Hazina башҡорт этно-проекты "Рәсәй-Мәҙәниәт" каналында "Шаболовка, 37" музыкаль клубы программаһында ҡатнашты.**

"Шаболовка, 37" музыкаль клубын музыкант Вадим Эйленкриг алып бара. Hazina тамашасыларға NAZA дебют альбомынан үҙенең композицияларын тәҡдим итте. "Ҡуңыр буға", "Мәглифә", "Ишбирҙе ҡасҡын" һәм "Алты егет" тигән халыҡ йырҙары яңғыраны. "Беҙ киң аудиторияға Башҡортостандың боронғо традициялары һәм легендалары яңғыраған музыкабыҙҙы асыуыбыҙ менән бәхетлебеҙ", - ти төркөмдөң йырсыһы Наилә Биктимерова.

Проектта ҡатнашыусылар ҙа йылы осрашыуҙан илһамдәрт алды. Проект етәксеһе Земфира Рәшитова тамашасыларҙы башҡорт халҡының уйын ҡоралы ҡурайҙың тарихы менән таныштырҙы, ә ҡумыҙсы һәм йырсы Зәлиә Нурлы альбомдың композицияларын ижад итеүгә илһамландырған легендалар хаҡында һөйләне. Төркөм Нина Шацкаяның Jazz-триоһы һәм Вадим Эйленкригтың Eilenkrig Crew коллективы менән башҡорт халыҡ йыры "Йүккәкүр генәйем" һәм рус халыҡ йыры "Перевоз Дуня держала" темаһына импровизация башҡарҙы.

ТЕЛҺӨЙӘР

# ҠАСАУЫР ЗАТТАР АРТҺЫН!

**Бүлмәгеҙҙә ҡарышы уйнаймы? Гөлдәр ҡарышыны күтәрмәй, һулый ҙа ҡуя.**

**Ҡарышы.** Ишек, тәҙрәнән үтәнән-үтә өргән ел; үтә ел. *Ҡыҫыҡ ишек ҡаршыһында ҡарышыға эләкмә. Асыҡ тәҙрәнән дә ҡарышы бәрә.*

**Ҡатран.** Декабрҙең боронғо атамаһы. *Ҡатран йылды теүәлләй. Ҡаты һалҡынлар ҡатранда ла йыш була.*

**Ҡарышып ауырыу.** Янып-өшөп ауырыу; биҙгәк тотоу. *Ҡарышыла тороп, ҡарышып ауырып китмә. Ҡарышып ауырығанда ҡоротло һурпа килешә.*

**Ҡасауыр.** Тотороҡло, ҡаҡшамаҫ холоҡло, үҙ һүҙен тотоусан. *Ҡасауыр егет. Халҡыбыҙҙа ҡасауыр шәхестәр күп.*

**Ҡат. 1.** Билдәләрәнән тыш, "ҡат" һүҙенең "эргә, ян" тигән мәғәнәһе лә бар. *Мәҫәлән: Йорт ҡатына ағас ултыртыу. Баҡса ҡатында балалар уйнай.* **2.** "Әҙ; тығыҙ" тигән төшөнсәләргә лә тура килә "ҡат" һүҙе. *Ҡат мәшәҡәт тыуҙы. Шуға ваҡыт та ҡат булып китте.*

**Шулай итеп, туған телебеҙҙе һаҡлау-яҡлауҙа ҡасауыр заттар арта торһон!**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫ ЯЛҒАНДАН...

## яман дөрөҫлөк яҡшы

Наҙан кеше һуҡырҙан яман, ялҡау кеше барынан да яман.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡартлыҡта дуҫтар артмай, был ваҡыттағы юғалтыуҙарҙы кире ҡайтарып булмай.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Бурысыңды атҡарыуҙан да юғарыраҡ бөйөклөк тә, шатлыҡ та юҡ.

**(Эрнст Ренен).**

Ҡайһы берәүҙәр асылы менән түгел, атамаһы менән генә кеше тип нарыҡлана.

**(Цицерон).**

Дуҫлыҡ "тейешһең" тип талап итмәй, мөмкин булғаны менән ҡәнәғәтләнә.

**(Аристотель).**

Бурыс ҡанаттан еңелерәк һәм тауҙан ауырыраҡ.

**(Япон мәҡәле).**

Батып барыусылар һыуҙы болғансыҡҡа әйләндерә лә инде...

**(Анджей Сток ).**

Кем үҙен бәхетһеҙмен тип атай, ул ысынлап та бәхетһеҙ.

**(Клод Гельвеций).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарттың өлкән улы өйләнеп, башҡа сығып йәшәй башлайҙар. Бер саҡ улы ата-әсәһенең хәлен белергә килә. Атаһы менән әсәһенең йәшәйеше шул тиклем күңелһеҙ тойола йәш кешегә һәм ул байтаҡ ваҡыт уларға йәлләп ҡарап ултыра. Ул үҙенең кәләше менән яратышып туя алмауын, һәр саҡ бер-береһенең ҡулдарынан ғына тотошоп, етәкләшеп йөрөүҙәрен, бер-береһенә эленән-әле мөхәббәт һүҙҙәре еткереүҙәрен иҫенә төшөрә. Шунан атаһына былай ти:**

**- Атай, ни өсөн һеҙ әсәйем менән бер-берегеҙгә һөйөү һүҙҙәре һөйләмәйһегеҙ? Шул тиклем күңелһеҙ йәшәйһегеҙ. Мин һеҙҙең дә беҙҙең кеүек бер-берегеҙҙе яратыуығыҙҙы, бәхетле булыуығыҙҙы теләйем...**

**- Әй, улым, - ти атай кеше, - һинең мөхәббәтең бала йәшендә генә бит әле, ул йылдан-йыл үҫер, өлкәнәйер, яңы һүҙҙәр өйрәнер, яңы мөнәсәбәттәргә яраҡлашыр. Мәҫәлән, мин әсәйеңдең күршеләр менән сираттағы тапҡыр талашып ҡайтып, уларға зарлана башлауын тыңлайым да, "Мин һине ҡалай яратам", тип уны бүлдерә һалам. Миңә балыҡ тота торған ауымды тегергә ярҙам иткәндә: "Эй, ҡартыҡайым, яратам да инде үҙеңде", - тигән һүҙҙәрҙе әсәйең дә әйтә. Ау тегергә яратмағанын беләһең бит һин уның..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәнән күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
28 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 2108

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.